✓ *Ошондай насар ғәҙәттәрҙән алыҫ бул: ялған һөйләү; һауаланыу, мин-минлек; уғрылыҡ; кемделер көйҙөрөү, борсоуға һалыу; кемделер хәрәм юлға этәреү; кешенән көнләшеү; кеше менән бәхәсләшеү, ғәйбәт һөйләү; һаранлыҡ; эсеңдә асыу һаҡлау; байлыҡҡа, юғары хакимлыҡҡа ынтылыу; имандаштарыңа асыу тотоу; кеше ҡайғыһына ҡыуаныу; кеше байлығын үҙләштереү; нәфсеңде тыймау; һүҙеңдә тормау, күп ант итеү; оятһыҙ һөйләшеү, кәрәкһеҙгә күп һөйләү; Аллаһтың яҙаһынан ҡурҡмау.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7 - 13 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№23 (597)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Иҡтисадта ла...**

кешелеклек сифаты булыу мөһим



5-6

**Этнотуризм нигеҙендә...**



8-9 "Урал батыр" брենды булырға тейеш

**Сит тарафтарға...**

бәхет һәм хыял артынан



10

**Еңеүсеһе ҡайҙан?**

Башҡортостандан!



11

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Таҙартҡан ерҙә түгел, бысратмаған ерҙә таҙа, тиҙәр. Шул кимәлгә нисек өлгәшергә, кешеләрҙә экологик мәҙәнилек сифаттары тәрбиәләүҙе нисек тормошҡа ашырырға була, тип уйлайһығыҙ?

***Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН, БДУ-ның Сибай институты экология кафедраһы мөдире, биология фәндәре докторы, профессор:*** Экология - ул ер-һыуҙарыбыҙҙы һәм барлыҡ тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙы ғына түгел, ә тотош әйләнә-тирәбеҙҙәге мөхитте үҙ эсенә алып өйрәнә торған күп аспектлы фән. Әйткәндәй, күптән түгел Сибайҙа "Биләмәләрҙең тотороҡло үҫеше: теория һәм практика" тип аталған ғилми-ғәмәли конференция булып үтте. Унда Рәсәй төбәктәренән, шулай уҡ Ҡаҙағстандан, АҠШ-тан белгестәр ҡатнашты, яңы иҡтисади шарттарҙа ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу, шуға бәйле көньяҡ-көнсығыш райондарҙа эшҡыуарлыҡты үҫтереү мәсьәләләре менән бер рәттән, биләмәләге экологик хәл дә тикшерелде. Экология мәсьәләһе, уның менән бәйле халыҡтың сәләмәтлеге ҡаҡшауы бер нисә докладта сағылыш тапты. Ысынлап та, сәнәғәттең йылдам үҫеше экология мәсьәләһен киҫкенләштерә генә. Ә кеше факторы менән аңлатылған битарафлыҡ, ваҡытында тейешле саралар күрелмәү арҡаһында төрлө сирҙәргә килтереп юлыҡтыра. Бөгөнгө экологик факторҙарҙың Сибай ҡалаһында йәшәүсе балалар сәләмәтлегенә кире йоғонтоһо айырым иғтибар үҙәгенә алынды конференция барышында.

Бөгөн беҙҙең бурыс - йәшәгән мөхитебеҙҙе таҙараҡ, яҡшыраҡ итеү маҡсатында ҡулыбыҙҙын килгән эштәрҙе башҡарыу. Ҡалаларҙа өмәләр үткәрелеп, санитар таҙартыу айлыҡтары булып торһа ла, ауылдарҙың бөтәһендә лә ундай сараларға дәррәү сығып эшләгәндәре бик һиҙелмәй. Ә бит ҡайһы бер ауылдарҙы сүп-сар өйөмдәре, емереклектәр баҫып алып бара, тигәндәй... Экологик тәрбиә тигән нәмә кешенең ҡанында булырға тейеш, тигән фекерҙәмен мин. Был тәрбиә, мәҙәнилек бала саҡтан һалынырға тейеш: ғаиләлә, балалар баҡсаһында, мәктәптә һ.б. Экология - ҙур фән ул, тигәйнем бая. Беҙгә экология фәнен мотлаҡ мәктәптә уҡытыуҙы башларға кәрәк, шунһыҙ тәбиғәтебеҙҙең киләсәген күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Халыҡта булғанды ҡәҙерләү тигән нәмә юҡ. Хәтерләйһегеҙҙер, мин элегерәк дарыу үләндәре хаҡында мәҡәләләр баҫтыра инем гәзиттәрҙә, хәҙер туҡтаным. Ни өсөнмө? Сөнки тап шул үләндәрҙе төбө-тамыры менән күпләп йолҡа башлайҙар. Ә инде ямғырлыраҡ йылдарҙа бәшмәк йыйыусыларҙың ни ҡыланғанын күрһәгеҙ! Бәшмәкте бит тамырын ҡуҙғытмай ғына бысаҡ менән киҫеп йыя ысын тәбиғәт дуҫтары. Бына шундай ябай ғына ҡағиҙәләрҙе лә белмәй йәшәп ятҡан кешеләр бар шул донъяла...

***Спартак ИЛЬЯСОВ, яҙыусы, тарихсы, йырауҫы:*** Тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәт, экологик мәҙәнилек, минеңсә, балала үҙ тыуған йортона һөйөү тәрбиәләүҙән, ата-әсә тәрбиәһе һәм өлгөһөнән башланырға тейештер. Ата-әсә йортон төҙөк, таҙа тота икән, бала шуны күреп, ошо өлгөгә ынтыла, ата-әсәһенә ярҙам итеп өйрәнә. Уның бындай ҡылығы йәшәү рәүешенә әйләнә. Ә был иһә үҙ сиратында артабан оло йортобоҙ - туған тәбиғәт һәм мөхитебеҙ шарттарына ҡарата ла күсә. Тәртип белгән - бөтөн ерҙә лә, бар нәмәгә ҡарата ла тәртип һаҡлай бит ул. Ә инде тәртип белмәгәнгә закон нигеҙҙәрен танытып өйрәтергә кәрәк. Бөгөнгө шарттарҙа бер ниндәй яҙыҡ эштең дә яҙаһыҙ ҡалмауына төшөндөрә барыу ҙа яйлап тәртипкә күндерер ине кешене, тик беҙҙә тәбиғәтте һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса закондарҙың үтәлешен контролдә тотоу системаһы насар ҡуйылған, яуаплылыҡ саралары бик йомшаҡ. Мәҫәлән, таҙартыу ҡоролмаһы иҫкергән йә төҙөк булмаған берәй етештереү объекты асыҡланған хәлдә лә улар быны ғәҙәттән тыш хәл булараҡ ҡабул итмәй, бәлки, еңелсә ҡурҡыу менән штраф түләй ҙә ҡотола һәм икенсе осраҡҡа тиклем мөхитебеҙҙе сәнәғәт ҡалдыҡтары менән ағыулауын дауам итә. Бер һүҙ менән әйткәндә, яуапһыҙлыҡ ҡына түгел, енәйәт ҡылыу менән бәрәбәр бөгөн бындай эштәр, шуға күрә мин ундайҙарҙы енәйәт яуаплылығына тарттырыу ниндәйҙер һөҙөмтә бирер ине, бәлки, тигән уйҙамын. Балала экологик мәҙәнилек тәрбиәләүгә өмөт бар әле, ә бына тәрбиә биреүҙән үткәндәргә фәҡәт ҡәтғи талап ҡуйырға ғына кәрәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!



БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты уҡытыусылары.

(Материалды 4-се биттә уҡығыҙ).

**✓ Кешеләрҙә экологик мәҙәнилек сифаттары тәрбиәләү йә бала саҡтан - ғаилә, мәктәп йылдарынан, йә булмаһа ҡаты тыйыу һәм контроль, штраф санкциялары аша тормошҡа ашырылырға тейештер.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәнәлдәргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БЕРҘӘМЛЕКТЕ ҠАЙТАРАЙЫҠ!

**Айрат ҠОБАҒОШЕВ, З.Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт академияһы профессоры, композитор:** Борон ата-бабаларыбыҙ ил-йортҡа ниндәй генә ауырлыҡтар, афәт килмәһен, йыйын йыйып, бөтә мәсьәләләрҙе кәңәшләшеп хәл иткән. Төрлө ырыуҙарҙан йыйылған аҡһаҡалдар ҡоро тейешле ҡарар сығарған. Улар ете ҡат үлсәп, һәр яҡлап уйлап, төплө бер фекергә килгән. Бөгөн беҙ мәсьәләләрҙе туплап хәл итеү традицияһын онотторҡ. Башҡорт халҡы тарҡауланды, күпселеге битарафҡа әйләнде. Битарафлыҡтан да ҡурҡынысыраҡ "ауырыу" юҡтыр. Ул халыҡтың үҙаңын юйырлыҡ ҙур афәт. Ә башҡорт халҡының тарихи үткәненә күҙ һалһаҡ, ул шул тиклем көслө рухҡа, революция осоронда автономиялы дәүләт төҙөрлөк берҙәмлеккә, нисәмә йылдар буйы дауам иткән ихтилалдар ваҡытындағы баҫтырылыуҙарға түҙерлек ғәйрәткә эйә булған. Булмышыбыҙға тоғро ҡалырға, үткәндәрҙән фәһем алырға саҡырам милләттәштәрҙе. Үҙаңыбыҙҙан яҙһаҡ - моңобоҙҙо юғалтасаҡбыҙ, моңһоҙ ҡалһаҡ - телебеҙ онотоласаҡ, телһеҙ иһә халыҡ та юҡҡа сығасаҡ. Ошондай ауыр хәлгә тарымаҫ өсөн йәштәребеҙгә, берҙәмлектә - көс, икәнен төшөндөрөп, башҡортлоҡҡа лайыҡлы булырға өйрәтергә кәрәк. Ошо саҡта, мәсьәләләрҙе йыйын үткәреп, аҡһаҡалдар ҡоро ойошторол хәл итеү йолаһы үҙенән-үҙе ҡайтасаҡ беҙгә, тип уйлайым.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Таҙартҡан ерҙә түгел, бысратмаған ерҙә таҙа, тиҙәр. Шул кимәлгә нисек өлгәшергә, кешеләрҙә экологик мәҙәнилек сифаттары тәрбиәләүҙе нисек тормошҡа ашырырға була, тип уйлайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Яҙғы-йәйге осорҙо матур өмөттәр бағлап көтөп алабыҙ, ләкин ҡыш буйына сүпләнгән, бысранған урындар, дөрөҫөн әйткәндә, бөтөн әйләнә-тирәбеҙ - ҡарҙан әрселеп, ҡот осмалы күренеш хасил була. Кешелек күптән шулай үҙ бысрағына үҙе батып үлер ине, әлдә экологик өмәләр, субботниктар бар. Һәм башлана "бөйөк" таҙартыу мәле: күпме кешене - эштән, уҡыусы балалар һәм йәштәрҙе - уҡыуҙарынан айырып, әллә күпме техника йәлеп итеп, сүп-сар йыябыҙ, йыуабыҙ, йышабыҙ, таҙартабыҙ... 5 майға яҙғы экологик өмәләр буйынса кәңәшмәлә яңғыраған мәғлүмәттәр буйынса, быйыл республикала биләмәләрҙе таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса 890 меңгә яҡын кеше ҡатнашты, 12,4 мең берәмек техника йәлеп ителде, республика биләмәләренең таҙартылған өлөшө 40 процентҡа яҡын тәшкил итте, тиелә. Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел, ләкин шуныһы йәл: иртәгә был таҙартылған урындар яңынан элекке хәленә ҡайтасаҡ. Ана, бер егет ҡулындағы шешәһен ырғытып та китте; йәм-йәшел газон өҫтөнә берәү бәйле этен сығарып "эш башҡарта", арыраҡ бер ҡатын урман-парк зонаһында күкрәп сәскә атҡан сирень, муйыл сәскәләрен ботарлай, яңы баш күтәргән умырзаяларҙы йолҡа, уларҙы үткенселәргә һатып кинәнә...

БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы докладынан күренеүенсә, быйылғы экологик кампания осоронда рөхсәт ителмәгән урындарға сүп-сар түгеү факттары айырым контролгә алынған. Тикшереү үткәрелгән 827 объекттың 124-ендә тәбиғәтте һаҡлау закондарын боҙоу осрағы асыҡланған. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: тикшереүҙәр беренсе сиратта һыу һаҡлағыс һәм парк зоналарында, ултыртылған урмандар биләмәләрендә алып барылған. Ғибрәт хәл, ләкин закон һәм тәртип боҙоуҙарҙың төп өлөшө, йәғни 70 процентҡа яҡыны, рөхсәт ителмәгән урындарға сүп-сар түгеү осрағын тәшкил итә. Таҙартыу өмәләре башланғандан алып, ана шундай 124 рөхсәтһеҙ сүплек асыҡланған, уларҙы юҡ итеү буйынса эш алып барыла, тиелә отчет материалында. Бындай урындар айырыуса Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалаларында, Мәләүез һәм Бишбүләк райондарында күпләп осраған. Уйлап ҡараһаң, бөгөнгө көндә тәбиғәт закондарын боҙған һәм шуға юл ҡуйған өсөн ғәйепле кешеләр енәйәт яуаплылығына тарттырылырға тейеш, ләкин беҙҙә закондарҙың йомшаҡ булыуы, уларҙың тейешле кимәлдә эшләп еткермәүе күп осраҡта битарафлыҡ, яуапһыҙлыҡ факттарын килтереп тыуҙыра. Әйткәндәй, ана шундай закон боҙоусыларҙың ни бары 89-ы ғына административ яуаплылыҡҡа тарттырылған.

Минеңсә, кешеләрҙә экологик мәҙәнилек сифаттары тәрбиәләү йә бала саҡтан - ғаилә, мәктәп йылдарынан, йә булмаһа ҡаты тыйыу һәм контроль, штраф санкциялары аша тормошҡа ашырылырға тейештер, тигән уйҙамын. Миҫал өсөн, булмаһа, Германияны ғына алып ҡарайыҡ: унда ғәмәлдәге закондарҙың күбеһендә, мәҫәлән, химия тармағынан алып, атом энергияһын файҙаланыуға тиклем - тәбиғәтте һаҡлау зарурлығына һылтанмалар бар. Экология унда - һөҙөмтәле закондар ҙа, мәғариф та, заманса технологиялар ҙа. Юҡҡа ғынамы ни илдең әлеге канцлеры Ангела Меркель власҡа килгәнсе экология министры булып эшләгән.Тәбиғәтте һаҡлау буйынса Экология селтәре ойошмаларында 5 миллиондан ашыу кеше әүҙем ағза булып тора, уларҙы ихтирам менән илдең "йәшел намыҫы, тәбиғәт адвокаттары" тип йөрөтәләр икән. Ер йөҙөндә киң билдәле Йәшелдәр хәрәкәте тап Германияла башланып киткән дә инде. Был миҫалды өлгө итеп килтереү шунан ғына: көн күргән мөхитебеҙҙе һаҡлау буйынса эш алға бармай икән, күршеләр тәжрибәһенә күҙ һалып алыу ҙа яҙыҡ булмаҫ, моғайын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыуға бик аҙ ғына ваҡыт ҡалып бара. Киләсәктә лә "Киске Өфө" гәзитенең тоғро уҡыусылары икәнегеҙҙе раҫлап, беҙгә дуҫ, теләктәш, таяныс булып ҡалыуығыҙҙы бик-бик теләйбеҙ. Әлеге миҙгел - баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнде йөрәгегеҙ менән аңлаһағыҙ ине, тибеҙ.**

• Шулай итеп, 2014 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, **50673** индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылып була.

• **Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"-нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.




• Республика ҡалаларында йәшәүселәр гәзитте почтанан үҙе барып алыу шарты (до востребования) менән **382 һум 50 тингә** яҙыла ала.

• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Июндә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ Гөлнур Яҡупованың **"Төш юрау китабы"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog.kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы башлығын һайлау ваҡытынан алда - 2014 йылдың 14 сентябрендә үтәсәк. Бындай ҡарарҙы Рәсәй Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашыу барышында ҡабул итте. Башҡортостан Президенты вәкәләттәре 2015 йылға тиклем ҡаралған. Республика ҡануниәтенә ярашлы, хәҙер Рөстәм Хәмитов Башҡортостан башлығы һайлауҙарында ҡатнаша ала.

✓Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов үҙенең Указы менән Динир Әхмәтйәновты республиканың урман хужалығы министры итеп тәғәйенләне. Икенсе указ менән Рәжәп Нәбиуллин урман хужалығы министры вазифаһынан бушатылды. Динир Әхмәтйәнов 2011 йылдың майынан алып 2014 йылға тиклем контракт буйынса Башҡортостан Республикаһы Бөрйән районы хакимиәте башлығы булып эшләгәйне.

✓Республика Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов Корея Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Илсеһе Ви Сон Лак етәкселегендәге делегацияны ҡабул итте. Яҡтар артабанғы хеҙмәттәшлек, ике илдең эшҡыуарҙары араһында файҙалы бәйләнештәр булдырыу тураһында һөйләште.

✓Өфөлә Ҡытай Халыҡ Республикаһы Цунцин ҡалаһы делегацияһының Башҡортостан етәкселеге менән осрашыуы булып уҙҙы. Чунцин ҡалаһы делегацияһы вәкиле Чжан Фэну Башҡортостанға беренсе тапҡыр килеүе тураһында хәбәр итте. Сәфәрҙең маҡсаты - ике төбәк араһында хеҙмәттәшлекте нығытыу.

✓Өфөлә төбәк Эске эштәр министрлыҡтарының һәм Баш Идаралыҡтарының йәмәғәт тәртибен һаҡлау буйынса полиция начальниктары урынбаҫарҙары менән IV Бөтә Рәсәй семинар-кәңәшмәһе уҙҙы. Беренсе тапҡыр кәңәшмә эшендә Ҡырым Эске эштәр министрлығы һәм Севастополь буйынса Рәсәй Эске эштәр министрлығы идаралығы хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Йыйылыусыларҙы республика етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов сәләмләне.

✓10 июндән алып 17-һенә тиклем ШОС һәм БРИКС илдәре фоторәссамдары ҡатнашлығында "Тәбиғәт. Кеше. Мәҙәниәт-2014" халыҡ-ара акцияһы уҙасаҡ. Быйыл ҡатнашыуға Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Иран, Италия, Бразилия, Ҡырым һәм Башҡортостан, Мәскәү һәм Силәбе ғариза биргән. Бөтәһе 20 фотографтың килеүе көтөлә. Акция сиктәрендә Өфөлә байтаҡ саралар үтәсәк.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры "Табиптар әҙерләү кимәле "оятһыҙлыҡ сигенә етте", тип белдерҙе. Шул йәһәттән бөгөн табиптар әҙерләү үҙенсәлектәре сере менән уртаҡлашмаҡсымын. Был Эскулап юлына баҫырға теләүселәргә лә, балаларын аҡ халатлы фәрештә итеп күрергә теләүсе ата-әсәләргә лә фәһемле булыр, тип уйлайым. Быны өсөн төп өс үҙенсәлекте аңлау фарыз - кемде уҡытырға, кемгә уҡытырға һәм нимәгә уҡытырға?**

# ДИПЛОМЛЫ БЕЛГЕСТӘР КҮП,

## дауалаусылар юҡ



### Кемде уҡытырға?

Бөгөн Башҡорт дәүләт медицина университетының беренсе курс студенттарының яртыһы тиерлек - район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтарының маҡсатлы йүнәлтмәһе буйынса ебәрелеүселәр һәм башҡа льготалы категорияға инеүселәр. Уларҙың күпселегенең Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре ул тиклем маҡтанырлыҡ түгел. Льготаларҙан ҡалған бер урынға юғары балға эйә 20-25 абитуриент дәғүә итә. Шуға күрә иң аҡыллы, иң перспективалы балалар Мәскәү, Санкт-Петербург һәм башҡа элиталы вуздарға китә. БДИ һөҙөмтәләре буйынса 100 балл йыйған сығарылыш уҡыусыларынан республикала ни бары ике генә кеше тороп ҡала!

Аҡса артынан ҡыуып, коммерция бүлектәрен арттырыу шундай һөҙөмтәгә килтерҙе - дауалау факультетында уҡыусылар ғына ла шул тиклем артты, хатта лекцияларҙы өс ағымда уҡырға тура килә. Медицина вуздарында талиптар һаны бер төркөмдә 15-тән дә арттырырға ярамай. Элек-электән клиник төркөм етеһигеҙ кешенән артмай ине, совет осоронда 9-10 кеше булды. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: был тиклем студентты мин ҡайҙа алып барырға тейеш - операция бүлмәһенә индерергә ярамай, башҡа ерҙәрҙә урын юҡ һәм, әйтәйек, хәлһеҙ ятҡан сирле нисек итеп 15-30 студенттың ҡыҙыҡһыныулы ҡарашына түҙһен. Хәҙер ауырыуҙар үҙ хоҡуҡтарын белә һәм берәүҙең дә тикшеренеү, өйрәнеү объекты булғыһы килмәй.

Бигерәк тә педиатрия факультеты студенттарының проблемаһы ҙур. Баш ҡала ни бары ике генә клиник дауахана бар: Республика балалар клиник дауаханаһы һәм 17-се дауахана. Ҡаланың үҙәгендә булғанына меңдәрсә студент йөрөй, икенсе меңе ҡаланың икенсе осонда булған Черниковкаға юлланырға мәжбүр. Микролекцияларҙы уҡыу кабинеттарында тыңлап, дауалау процесында ҡатнашмаған талиптарҙан ниндәй белгес сыҡһын, хатта улар үҙҙәре уҡ профессияһына ҡыҙыҡһыныу юғалта. Һөҙөмтәлә ҡулына шприц та, пинцет та, скальпель хаҡында әйтеп тораһы ла түгел, тотоп ҡарамаған "дипломлы" белгес әҙерләнә. Шулай уҡ өҫтән төшөрөлгән уҡытыу программаһы ла аптырата: студенттар физиканан һәм философиянан имтихан тапшыра, ә хирургиянан - юҡ! Бөгөн, дөрөҫөн әйткәндә, йәш табиптан - пациент, ә табип пациенттан ҡурҡа. Сөнки бәләкәй генә табип хатаһы өсөн дә уны прокуратура эҙәрлекләүе көтә!

Медицина өлкәһенә иң аҡыллыларҙы, иң сыҙамдарҙы, үҙҙәренең ғүмерен кеше һаулығы хаҡына ҡорбан итергә әҙер булыусыларҙы, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған, тәмәке, алкоголле эсемлектәр менән дуҫ булмаған кешеләрҙе генә һайлап алырға кәрәк. Гиппократ был хаҡта шулай тип иҫкәрткән: "Табип! Тәүҙә үҙеңде дауала!" Медик менән полиция хеҙмәткәренең уртаҡлығы нимәлә? Улар икеһе лә кеше ғүмерен яҡлай һәм һаҡлай! Әммә полицияға льготалы хеҙмәткәрҙәрҙе алмайҙар - унда аҡыл йәһәтенән, бигерәк тә физик йәһәттән, сәләмәт курсанттар кәрәк.

### Кемгә уҡытырға?

Элегерәк медицина уҡыу йорттарында уҡытырға конкурс буйынса иң тәжрибәлеләрҙе, республикаға исемдәре билдәле кешеләрҙе саҡыралар һәм уларға фатирҙар бирәләр ине. Улар студенттарҙың кумиры, табиптарҙың остаһы булды. Хәҙер хатта өлкән курстарҙа ла былтырғы студент-ординаторҙар белем бирә, сөнки үҙен саҡ ҡына ихтирам иткән бер генә тәжрибәле белгес тә вузға уҡытырға бармаясаҡ. Сөнки быны өсөн уға бик аҙ эш хаҡы түләйҙәр. Бөгөн вуз уҡытыусыһы ғаиләһен аҫырау өсөн өҫтәмә бер нисә урында тир түгергә мәжбүр.

Былтыр 1 сентябрҙән ғилми дәрәжә өсөн өҫтәмә түләүҙәрҙе алдылар. Быны, йәнәһе лә, ҡыҫҡартылған ставкалар иҫәбенә эш хаҡын күтәреү менән аңлаттылар. Ғәмәлдә, төркөмдәрҙә студенттар һаны артты, ә уҡытыусының эш хаҡы 200 һумға күтәрелде. Хәҙер фән кандидатының ставкаһы 10 мең һум самаһы, фән докторы, профессорҙыҡы - 29 мең һум.

Вузда фән менән шөғөлләнеүҙең абруйы ла түбәнгә тәгәрәне. Үҙгәртеп ҡороуҙарға тиклемге быуын диссертацияларҙы тиҫтә йылдар буйына яҙа ине, докторлыҡ диссертациялары ғәмәли һаулыҡ һаҡлау проблемаларын хәл итте. Монографиялар барлыҡ дауаханаларҙың ординаторҙар бүлмәһендә ятты. Оҙаҡ йылдар вуздың Ғилми совет рәйесе булып эшләргә тура килде. Ул ваҡытта диссертация яҡлаусыларҙан уларҙың фәнни эше нигеҙенә ятҡан эшмәкәрлеген раҫлаусы "Ауырыуҙар тарихы" кенәгәләрен талап итә торғайным. Шул саҡта күренә ине кемдең фәнни эшенең ысынлап та ғәмәли медицина файҙаһына эшләгәне, кемдең плагиатлыҡ менән шөғөлләнгәне. Ә хәҙер бындай ҡаты талаптар юҡ һәм ҡаплап-ҡаплап фән кандидаттары, фән докторҙары әҙерләнә. Бөгөн Башҡортостанда 11 мең самаһы фән кандидаты һәм 3 меңдән ашыу фән докторы - тотош бер район халҡы - бар.

Мине, табип булараҡ, бигерәк тә ауыр һуғыш йылдарында - 1944 йылда Сталин тарафынан асылған Медицина фәндәре академияһының ябылыуы борсоуға һалды. Халыҡтар атаһы медицинаның әһәмиәтен шул ваҡытта уҡ аңлаған: ауырыу кеше илен яҡлай ҙа, ижад итә лә, ил менән идара итә лә алмай! Илебеҙҙең бөгөнгө хәлен үҙегеҙ баһалағыҙ.

### Нимәгә уҡытырға?

Сығарылыш курсы студенттарын тегендә йәки бында эшкә йүнәлтергә маташалар, әммә уларҙың күпселеге ҡулына диплом алыу менән медицинанан китә. Сөнки дауалау өсөн белем кәрәк бит. Ә кемдер аҡса аҙ булыуҙы сәбәп итә - эш хаҡы 6,5 мең һум ғына бит. Яҡшы итеп йыһазландырылған ҙур дауаханаларҙа табип модернизация һәм юғары технологиялар буйынса түләүҙәр менән тәьмин ителгән: шуға тағы ла айына ете-һигеҙ дежурстволы ла ҡушҡанда, эш хаҡы 40 меңгә етеүе ихтимал.

Миллион һум биреп табиптарҙы ауылдарға ылыҡтырыу кадрҙар ҡытлығын хәл итеүгә бер нисек тә йоғонто яһамай: нигеҙҙә, уларҙы ауылдарға, ата-әсәһенә ҡайтҡан белгестәр ала. Әммә был аҡса уртаса комплектлы автомобилгә йәки барлыҡ уңайлыҡтары урамда булған һәм таҡтанан төҙөлгән тауыҡ һарайылай ғына йорттан башҡаға етмәй. Шуға күрә Рәсәй халҡы ысынлап та һау булһын, дауаланһын өсөн буласаҡ табиптарҙы әҙерләү системаһын тамырынан үҙгәртергә кәрәк. Быны мин түбәндәгесә күҙаллайым:

- медицина университетына бары тик медучилище, медколледждан һуң ғына ҡабул итергә;
- уҡытыусыларҙы кәмендә 10 йыл практик стажы булған тәжрибәле белгестәрҙән генә туплаға, уларға фән, белем биреү һәм дауалау өсөн тулыһынса эш хаҡы түләргә.
- медицина ярҙамы күрһәтеү кимәле барлыҡ дауалау учреждениеларында ла бер төрлө булырға тейеш.

**Венер СӘХӘҮЕТДИНОВ, медицина фәндәре докторы, профессор.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Президенты ҡарамағындағы Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары буйынса комиссия Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге дәүләт премияһына эштәр ҡабул итә башлауы тураһында хәбәр итә. Дәғүә итеүселәр коллективы биш кешенән дә артмаҫҡа тейеш. Премияға дәғүә иткән материалдар ағымдағы йылдың 15 июненән алып 15 июленә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450101, Өфө ҡалаһы, Туҡай урамы, 46, Башҡортостан Президенты Хакимиәте, 315-се, 419-сы бүлмәләр. Белешмәләр өсөн телефон: 280-80-93, 280-80-75.Почта аша ебәрелгән материалдар ҡабул ителмәй.

✓Төркиәнең Эдирне ҡалаһында өс көнлөк III Бөтә донъя төрки форумы тамамланды. Сараларҙа донъяның 60 иленән 143 делегат ҡатнашты. Улар араһында төрки телле илдәр - Төркиә, Әзербайжан, Ираҡ, Ҡазағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Рәсәй республикалары - Башҡортостан, Дағстан, шулай уҡ Европа дәүләттәре - Голландия, Германия, Македония, Бельгия, Франция, Венгрия бар. 11 секция ултырышында мәҙәниәт, дипломатия һәм туризм темаһына ҡағылған мәсьәләләр тикшерелде, ҡайһы бер проекттарҙың презентациялары уҙҙы. Бер секция ултырышында "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы күҙәтеүсеһе Ләйлә Ишморатова доклад менән сығыш яһаны.

✓Июндә республика халҡын дүрт көнлөк "каникулдар" көтә. БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, Рәсәй көнө хөрмәтенә ял көндәре тип 12, 13, 14-се һәм 15 июнь иғлан ителгән.

✓Бер юлы ун дүрт йәш автор Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ағзаһы итеп ҡабул ителде. Союз ағзалығына ун шағир һәм дүрт прозаик ҡабул ителде, уларҙың күбеһенә 30 йәш тә тулмаған. Ун дүрт яҙыусынан күптәрен башҡорт шиғриәте һәм прозаһы секцияһы тәҡдим иткән, өсәүһен БР Яҙыусылар союзының рус телле яҙыусылар берләшмәһе кәңәш иткән, икәүһен - татар телле яҙыусылар берләшмәһе.

✓Башҡорт дәүләт университетының генетика һәм фундаменталь медицина кафедраһы ғилми коллективы РФ Фән һәм мәғариф министрлығының буйынса 10 миллион һум күләмендәге грантҡа лайыҡ булды. Грант яулаусы проекттың етәксеһе - профессор Эльза Хөснөтдинова.

**“Башинформ”дан.**

✓ **2014 йылдың 15 майына Әсәлек капиталы күләме 429 408 һумға барып етте. Әсәлек капиталының бер өлөшөн тотоноп өлгөргән сертификат эйәләренең ҡалған суммалары шулай уҡ йыл да индексацияланасы.**



"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# АҘАҠҠЫ БИТЕНӘН БАШЛАЙЫМ...

**Ғәжәйеп хәл, бөтә гәзит-журналдарҙы беренсе битенән тотоп уҡыһам да, "Киске Өфө"нө 16-сы битенән башлайым. Был "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһы аҫтында баҫылған халыҡ мәҡәлдәре, аҡыл эйәләренең, күренекле ғалим, һүҙ оҫталарының тәрән мәғәнәле фекерҙәрен, йор һүҙҙәрен, фәһемле хикәйәттәрҙе тиҙ генә уҡып сығыу теләгенән киләләр, тип уйлайым.**

Филолог булараҡ, мине "Әсәйем лөғәте", "Тел төбө - хазина" рубрикаларында бирелгән мәҡәләләр бик ҡыҙыҡһындыра. Һүҙлектәрҙә, әҙәби әҫәрҙәрҙә осрамаған, йәнле телмәрҙә генә ҡулланылған диалект һүҙҙәрҙең мәғәнәһе ғалимдар түгел, ә халыҡ аңлатмаһында бирелеүе туған телебеҙҙең ни тиклем бай, тәрән булыуын сағылдырып ҡына ҡалмай, уға ҡарата ихтирам, иғтибар тыуҙыра, һөйөү тәрбиәләй. "Киске Өфө" гәзите тик ҡала яңылыҡтары менән генә сикләнмәүе, ауылдың, башҡа мәмләкәттәрҙең көнүҙәк проблемаларын яҡтыртыуы, халыҡ алдына сығарыуы, милләттәштәрҙе уйланырға, фекер алышырға әйҙәүе менән әһәмиәтле.

Ғөмүмән, "Киске Өфө" гәзитенең тәрбиә эшендә, төрлө яҡлап белемеңде арттырыу, зиһенеңде үҫтереүҙә әһәмиәте ҙур. Сит ил философтары, ғалимдары, аҡыл эйәләренең үҙ тәжрибәһенән сығып әйтелгән кәңәштәре баҫылған "Уныш ҡаҙан" рубрикаһы йәштәргә бик кәрәкле, тип һанайым. Шуға күрә, факультетыбыҙҙа һәр төркөм үҙе теләп гәзиткә яҙыла, студенттар уны оло ҡыҙыҡһыныу менән уҡый.

**Ирена ҠОЛЬҺАРИНА,**
**филология фәндәре кандидаты, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты доценты.**

# УЛ ТАРИХ КИТАБЫ КЕҮЕК

**"Киске Өфө" ижтимағи-сәйәси-мәҙәни гәзите замандан да артта ҡалмай, шул уҡ ваҡытта башҡорт халҡының тарихын төрлө яҡлап яҡтыртыусы матбуғат өлгөһө, тип билдәләр инем.**

Мин гәзиттең һәр һанында баҫылып сыҡҡан Сергей Руденконың "Башҡорттар" китабынан тәржемә ителгән мәғлүмәттәрҙе, 1812 йылдағы Ватан һуғышына ҡағылышлы тарихи мәҡәләләрҙе оло ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барам. Башҡорттоң үткәндәрен үҙебеҙ иҫләп, милләттәштәргә иҫләтеп тормаһаҡ, кем белер. Быға ошо үҙенсәлеге "Киске Өфө" гәзитен бөтөн гәзит-журналдарҙан бер башҡа өҫтөн ҡуя ла инде. Ул милләттәштәребеҙҙең күңел кисерештәрен сағылдырыусы, рухын күтәреүсе, халыҡсан гәзит булыуы менән дә айырылып тора. Киләсәктә лә "Киске Өфө" гәзите һайлаған юлынан тайпылмаһын, башҡорт милләтенең рухи байлығын, данын, ысын йөҙөн сағылдырыусы, киләсәк быуынға тәкмәй-сәсмәй еткереүсе булып ҡалһын, халыҡтан алыҫлашмаһын, тигән теләктәмен.

**Ғәйнислам ИБРАҺИМОВ,**
**БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты көнсығыш телдәре кафедраһы мөдире.**

# АЛДАН ӘЙҘӘП БАРЫУСЫ

**"Киске Өфө" гәзите аҙнаһына бер тапҡыр сығарылһа ла, башҡа ваҡытлы матбуғат өлгөләренә ҡарағанда һәр саҡ бер аҙымға алда бара. Уның биттәрендә бөгөнгөбөҙ генә түгел, үткәнебеҙ һәм киләсәгебеҙ ҙә сағылыш таба.**

Халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың шиғырында:

*"Бер аҙым алға баҫам да,*
*Әйләнәм мин артыма,*
*Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,*
*Күҙ һаламын халҡыма",* - тип әйтелгәнсә, "Киске Өфө" халыҡты әйҙәгән, уға юл күрһәткән һәм шул уҡ ваҡытта башҡорт ерлегенән айырылмаған гәзит ул. Миңә билдәле аҡыл эйәләре, философтар, күренекле кешеләр әйткәндәрҙән алынған һәм "Киске Өфө"нөң беренсе битендә иң өҫтә урынлаштырылған ҡыҫҡа ғына, йөплө, тәрән мәғәнәле эпиграфтарҙы уҡыу оҡшай. Гәзитте почта йәшнигенән алам да, ошо ҡыҫҡа ғына фәһемле һүҙҙәрҙе фатирға күтәрелеп еткәнсе уҡый һалам, рухым байый, ваҡытың да бушҡа китмәй. Яратып уҡыған "Киске Өфө" биттәрендә яңы сыҡҡан башҡортса китаптар, бигерәк тә балалар әҙәбиәте тураһында мәғлүмәттәр ҙә күрергә теләр инем.

**Фәрзәнә ВӘЛИЕВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИХАТАЛАР ТӨҘӨКЛӘНДЕРЕЛӘ

**Һуңғы йылдарҙа автомобилдәр һаны артыуы, бер яҡтан, халыҡтың йәшәү кимәле яҡшырыуын күрһәтһә, икенсе яҡтан, машиналарҙы ҡуйыу урындары етешмәүен һәм йорт ихаталарының насар торошта булыуын асыҡланы.**

Ошо проблеманы хәл итеү йүнәлешендә баш ҡалала дүртенсе йыл инде күп фатирлы йорттарҙың ихата территорияларын капиталь ремонтлау буйынса программа тормошҡа ашырыла. 2014 - 2015 йылдарҙа дөйөм майҙаны 240 437 квадрат метр булған 116 объектты ремонтлау планлаштырыла. Бының өсөн 250 миллион һум аҡса бүленәсәк.

Йорт ихаталарын төҙөкләндереү юлдарҙы киңәйтеү һәм асфальтлау, бордюрҙар урынлаштырыуҙы күҙаллай. Мөмкинлек булған урындарҙа халыҡтың шәхси автотранспортын парковкалау урындары ла эшләнәсәк.

2011 - 2012 йылдарҙа дөйөм майҙаны 1 079 500 квадрат метр булған 937 объектты ремонтлау өсөн 1 019 300 000 һум аҡса бүленә. Быltыр иһә 115 ихата территорияһы ремонтлана. Эштәрҙе ҡабул итеүҙә граждандар үҙҙәре лә ҡатнаша һәм уларға унайлыҙлыҡ тыуҙырған урындар булһа, етешһеҙлектәр бөтөрөлә.

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫНА - ТОРЛАҠ

**"Балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамының өҫтәмә саралары тураһында" Федераль закон тормошҡа ашырыла башлағандан алып Башҡортостан Республикаһында 181 мең ғаилә Пенсия фондынан Әсәлек (ғаилә) капиталына сертификат алды.**

Әсәлек капиталы аҡсаһын ғаиләләр йыш ҡына үҙҙәренең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға тотона. Ошо маҡсаттарҙа республикала 108 мең ғаилә 36, 1 миллиард һум аҡса йүнәлтте, шуларҙан 76 мең ғаилә Әсәлек капиталы менән 26,8 млрд. һум күләмендә тулыһынса йәки өлөшләтә торлаҡ кредиттын ҡапланы. 32 меңдән ашыу ғаилә кредит алып тормайынса, 9,3 млрд. һумдан ашыу суммала Әсәлек капиталын туранан-тура торлаҡ һатып алыу, төҙөү һәм йүнәтеүгә йүнәлтте.

Бынан тыш, Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров һүҙҙәре буйынса, Әсәлек капиталын 2,5 мең ғаилә - балаы уҡытыуға, 200 ғаилә балалар баҡсаһы өсөн түләне, ә 90 әсә буласаҡ пенсияларының тупланма өлөшөнә йүнәлтте.

Әсәлек капиталын файҙаланыуҙың ваҡыты сикләнмәгән, шуға күрә аҡсаны тотонғанда уның күләменең йыл һайын индексацияланыуын иҫәпкә алып башҡарырға кәрәк. Әйткәндәй, уның иң тәүге суммаһы 250 мең һум тәшкил иткән булһа, 2014 йылдың 15 майына Әсәлек капиталы күләме 429 408 һумға барып етте. Әсәлек капиталының бер өлөшөн тотоноп өлгөргән сертификат эйәләренең ҡалған суммалары шулай уҡ йыл да индексациялана.

# ТАУ БАШЫНДА БАЛҠЫЙ БЕР ҠАЛА...

**Быйыл баш ҡала Өфө ҡәлғәһе нигеҙләнеүгә 440 йыл тулыуҙы билдәләй. Был сарага "Яратҡан ҡалам" фотоконкурсы ла бағышлана. Унда 16 йәштән өлкән барлыҡ теләүселәр: һәүәскәрҙәр ҙә, профессиональ фоторәссамдар ҙа ҡатнаша ала.**

Конкурс биш номинация буйынса баһаланасаҡ: "Байрамса Өфө" (ҡаланың байрамса, тантаналы мәлдәре), "Йәмле Өфө" (баш ҡаланың һеҙҙең күңелегеҙгә хуш килгән урындары), "Тарихи Өфө" (ҡаланың архитектура һәйкәлдәренең ҡыҙыҡлы ракурстары), "Өфө уттары" (төнгө ҡала), "Уфишкалар" (ҡала тормошонан иң сағыу һәм ғәҙәти булмаған мәлдәр). Автор һәр номинацияға өсәр фото тәҡдим итә ала. Еңеүселәр дипломдар һәм ҡиммәтле бүләктәр, конкурсты ойоштороусылар һәм партнерҙарының махсус призлары менән билдәләнәсәк. Иң яҡшы фотолар "Яратҡан ҡалам" баҫмаһында донъя күрәсәк. Эштәр 31 октябргә тиклем Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығында, "Визуал" художество фотографияһының Өфө оҫтаханаһы" МБУ-һында ҡабул ителә. Аныҡ мәғлүмәттәрҙе visual-ufa.ru сайты йәки 230-51-85 телефоны буйынса алырға мөмкин.

# УҠЫУ БӨТТӨ...

**Ошо көндәрҙә муниципалитетта ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов етәкселегендә балаларҙың, үҫмерҙәрҙең һәм йәштәрҙең йәйге ялын, мәшғүлләген ойоштороу һәм сәләмәтлеген нығытыу мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссияһының ултырышы уҙғарылды.**

Әлеге ваҡытта балаларҙың ялын ойоштороусы 151 объект әҙер. СанПиН-дың яңы ҡағиҙәләренә ярашлы, уларҙың һәр береһе махсус комиссия тарафынан ҡабул ителергә, экспертиза үтергә тейеш. Ул ғына ла түгел, көндәлек продукция тупланмаһы, рациондың калориялылығы, бер балаға тура килгән майҙан күләме, лагерҙы санитар эшкәртеү һөҙөмтәләрегә - барыһы ла ентекле тикшереү үтә. Ҡуйылған талаптарға яуап биргәндә генә балаларҙың ялын ойоштороу учреждениелары эш башлай.

Ә инде уҡыуҙан буш йәки йәйге каникул мәлендә ваҡытын ял итеп түгел, ә эш менән үткәрергә теләүсе 14-18 йәшлек үҫмерҙәрҙе эшкә урынлаштырыу йәнәтенән дә эшмәкәрлек алып барыла. Быйыл 4210 үҫмерҙе эшкә урынлаштырыу планлаштырылған. Республика бюджетынан был маҡсатта 4,6 миллион һум бүлеү ҡаралған. Йыл башынан алып 1230 балиғ булмаған граждан эшкә урынлаштырылған да инде. Йәйге осорҙа 14 йәшлектәр өсөн иң ҡулай хеҙмәт төрө - промоутер, курьер, мерчендайзер булһа, 16 йәшлектәр өсөн реклама агенты, официант.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Мәскәүҙә радиотапшырыуҙар өлкәһендә Radiostation Awards бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы уҙҙы. "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһының "Юлдаш" мәғлүмәт һәм йыр-моң каналы Волга буйы федераль округының иң яҡшы радиостанцияһы тип танылды. "Юлдаш" радиоһы 50 мең самаһы тауыш йыйған. Былдай һөҙөмтә конкурстың рекорды булды. Дөйөм алғанда премияға илдең 170-тән ашыу радиостанцияһы дәғүә итте, "Юлдаш" - бөтә Рәсәй конкурсының еңеүсеһе булған берҙән-бер милли радио.

✓2013 йылдың сентябрендә Өфөлә Конгресс-холл артындағы майҙанда беренсе тапҡыр музыка сәнғәте йондоҙҙары һәм БР Милли симфоник оркестры ҡатнашлығында масштаблы open air уҙа. Шул ваҡыттан алып майҙансыҡҡа Өфө амфитеатры исеме беркетелде. 2014 йылда "Симфоник төн" проекты Башҡортостан Республикаһы Президентының 15 миллион һумлыҡ грантына лайыҡ булды - финанслау сиктәрендә Йәштәр симфоник оркестры өсөн музыка ҡоралдары алыу планлаштырылған.

✓"Өфө амфитеатрында" (Конгресс-холл артындағы майҙанда) "Симфоник төн" исемле open air концерты уҙҙы. Өс сәғәт дауамында асыҡ һауала Ағиҙел йылғаһы буйында симфоник музыка - башҡорт, рус һәм сил ил музыкаларынан халыҡ яратып ҡаршы алған һәм популяр әҫәрҙәр яңғыраны. Тамашасылар араһында республика етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов та бар ине. Кисәнең төп геройҙары - йәш солистар, З.Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенттары һәм уны тамамлаған сәнғәт эшмәкәрҙәре, Башҡортостан Республикаһының Йәштәр симфоник оркестры. Яҡынса баһалар буйынса, "Симфоник төнгә" 12 меңләп кеше йыйылғайны.

✓БР Ауыл хужалығы министрлығы Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарында аграр профиль буйынса белем алыу өсөн дәғүә итеүселәрҙе йыя. Буласаҡ тармаҡ белгестәрен әҙерләүгә килешеүҙәр Рәсәйҙең өс юғары уҡыу йорто Рәсәй дәүләт аграр университеты, Горячкин исемендәге Механика һәм энергетика институты, Урал ветеринар медицина академияһы менән төҙөлгән. Конкурста ҡатнашыу өсөн документтар 16 июндән алып 27-һенә тиклем Өфө ҡалаһы Пушкин урамы, 106 адресы буйынса 324-се кабинетта ҡабул ителә. Телефон: (347) 218-05-46.

✓ *Әбыл ҡағиҙәнең нимә икәнен беҙ лицей-интернатҡа уҡырға килгәндең икенсе көнөндә үк белдек. Атай-әсәй биреп ебәргән аҡса иҫәпле, магазинға инһәң дә, нимәне һатып алыу дөрөҫөрәк булыр икән, тип, башта уйлап алаһың.*



БАЛАЛАР ҠОРО

**Бөгөнгө заманда кешенең йәшәйешендә иҡтисади белемдең кәрәклеген иҫбатлап тороу артыҡ, шуға ла иҡтисад йүнәлешендә белем биреүсе уҡыу йорттарының уҡыусылар араһында абруйы ҙур. Баш ҡалала урынлашҡан Республика иҡтисад лицей-интернаты ла шундайҙар иҫәбенән. Лицейҙың 11-се класс уҡыусылары - Алина Ғәйнуллина, Илида Талипова, Айнур Ғәтиәтуллинды түңәрәк ҡорға саҡырып, уҡыу йорто тураһында һөйләшкәндә, уларҙың иҡтисад буйынса белемдәрен дә һынап ҡараныҡ.**

# ИҠТИСАДТА ЛА...

## кешелеклек сифаты булыу мөһим



➔ **Был турала уйланмаһаҡ та, һәр кеше иҡтисади эшмәкәрлектә ҡатнаша, иҡтисади мөхиттә йәшәй, аҡса, хаҡтар, хеҙмәт хаҡы, сығым, килем тигән терминдарҙы даими ҡуллана. Һәр кемебеҙгә "иҡтисад" тигән һүҙ таныш булһа ла, һәр кем уны үҙенсә аңлай. Һеҙҙең өсөн иҡтисад нимә ул?**

**Алина:** Ысынлап та, һәр кеше көн һайын әллә күпме иҡтисади проблемаларға тап була, сөнки ул йәшәр өсөн туҡланырға, кейенергә, белем алырға, ял итергә һ.б. тейеш. Нимә менән булышырға, теге йәки был тауарҙы һатып алырғамы, юҡмы, уның өсөн аҡса етәме, тигән һорауҙар гел осрап тора, тимәк, иҡтисад йәшәйештән айырылғыһыҙ бер өлөшө.

**Илида:** Лицейға уҡырға килгәндә, мин иҡтисад - ул аҡса, аҡса эшләү менән бәйле фән тип уйлай инем. Хәҙер уның мәғәнәһе күпкә киңерәк икәнен беләм, тәүҙә ул йорт хужалығын алып барыу ҡанундары булараҡ ҡабул ителһә, аҙаҡтан ул тотош йәмғиәтте әйләндереп тороусы тәгәрмәскә әүерелә. Сөнки бөгөн барған бөтөн процестар, хатта һәр бер кешенең хеҙмәте, был нисек кенә ҡәтғи яңғырамаһын, аҡса менән баһалана.

**Айнур:** Иҡтисад, минеңсә, иң тәүҙә сығымдарҙы нисек дөрөҫ итеп файҙаланыуға бәйле. Дөйөм ил күләмендә алғанда ла был шулай. Ә был ҡағиҙәнең нимә икәнен беҙ лицей-интернатҡа уҡырға килгәндең икенсе көнөндә үк белдек. Атай-әсәй биреп ебәргән аҡса иҫәпле, магазинға инһәң дә, нимәне һатып алыу дөрөҫөрәк булыр икән, тип, башта уйлап алаһың. Шуға аҡса тоторға өйрәнеү өсөн мотлаҡ ғаиләнән ситтә, мәҫәлән, интернатта йәшәү бик файҙалы. Кешенең теләктәре сикһеҙ бит ул, ҡайһы берҙә үҙеңә бөтөнләй кәрәкмәгән нәмәләргә эйә булырға хыялланаһың.

➔ **Лицей-интернаттың уҡыусылары "Киләсәк бөгөндән башлана", тигән девиз аҫтында белем ала. Һеҙ быны нисек тормошҡа ашыраһығыҙ?**

**Алина:** Мәктәп уҡыусыһы өсөн киләсәк, ысынлап та, бөгөндән башлана. Киләсәктә ниндәй кеше булырыңа нигеҙ тап ошо мәлдә һалына, тип уйлайым. Үҙ өҫтөңдә эшләү, ныҡлы белем алыу - төп бурысыбыҙ. Быны бөгөн эшләмәһәк, иртәгә ваҡытыбыҙ булмаясаҡ.

**Илида:** Ошо хәҡиҡәтте бар уҡыусылар ҙа аңлаһын ине. Яҡшы белем алыу, һәр яҡлап үҫешкән шәхес булып өлгәреү өсөн иң яҡшы йылдарҙы бушҡа үткәреп, аҙаҡтан үкенгән кешеләр ҙә була бит. Шуға мин фәнни-ғәмәли конференцияларҙы, олимпиадаларҙы ла ҡалдырмаҫҡа, төрлө түңәрәктәргә йөрөргә лә тырышам, шулай үҙемдең лидерлыҡ һәләттәремде астым. Уҡытыусыларыбыҙ беҙҙең бер көнөбөҙ ҙә буш үтмәһен, тип тырышып, бар шарттарҙы тыуҙырып торғанда, насар уҡыу, насар уҡыусы булыу мөмкин дә түгел. 11-се класты тамамлағас, тағы ла ҙурыраҡ мөмкинлектәр асыласаҡ, әлегә БДИ-ның ҡыҙыу осоро.

**Айнур:** Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырыу өсөн психик яҡтан ныҡ булыу кәрәк икән. Етмәһә, йыл һайын уҡыусыларға төрлө сюрпризлар әҙерләп торалар, йә металл эҙләүсе прибор, йә күҙәтеү камералары - былар барыһы ла өҫтәмә көсөргәнешлек тыуҙыра. БДИ-ны мин тормош имтихандары, тип атайым. Уларҙы нисек тапшыраһың, артабанғы яҙмышың шулай китәсәк - вузға бараһыңмы, әллә әрмегәме. Был минең осрағымда шулай.

➔ **Әйткәндәй, лицейҙа ҡыҙҙар менән малайҙарҙың айырым уҡыуына ҡарашығыҙ нисек?**

**Айнур:** Был иғтибарҙы белем алыуға ғына йүнәлтергә булышлыҡ итә, шуға бик ыңғай ҡарайым. Класта ҡыҙҙар булһа, беренсенән, үҙең уҡымайһың, ә уларҙан күсерергә ғәҙәтләнеп китәһең. Лицейға уҡырға килгәс, тәүҙә насар билдәләргә уҡыным, бер көн артта ҡалһаң, ун көн йүгереү рәхәт булмаһа ла, уҡыуымды яйға һала алдым. Һәр яҡлап өлгөлө булған "а" класын тамамланым. Икенсенән, холоҡтар, ҡылыҡтар башҡа, тик егеттәр араһында үҙеңде бөтөнләй икенсе тояһың. Унан һуң, класта ҡыҙҙар булһа, матур күренергә, уларға оҡшарға тырышаһың, етмәһә, араларында оҡшатып ҡына йөрөгән ҡыҙың да булһа, көлкөлө берәй хәлгә ҡалып ҡуймайым, тип тырышаһың.

(Дауамы 6-сы биттә).

ҺОРАУ - ЯУАП

## БАНК МЕНӘН БЕРГӘ...

**Һуңғы ваҡытта Рәсәйҙең Үҙәк банкы төрлө банктарҙың лицензияһын ала башланы. Әгәр ҙә мин кредит алған банкты ла лицензияһыҙ ҡалдырһалар, мин бурысымды ҡайҙа түләргә тейеш булам? Әллә бурысым да банк менән бергә "янамы"?**

- Банк лицензияһыҙ ҡалып, эшмәкәрлеген туҡтатҡан осраҡта ла, бурысты тулыһынса ҡайтарып бирергә тура киләсәк. Әгәр ҙә суд банкты банкрот тип тапһа, банктың милке, шул иҫәптән кредит буйынса бурыстар ҙа, икенсе кредиторға йәғни банкка тапшырыла. Шуны онотмағыҙ: бурысығыҙ күскән банк һеҙгә икенсе төрлө шарттар менән яңы килешеү төҙөүҙе тәҡдим итергә йәки бурысты тулыһынса ҡайтарыуҙы талап итергә мөмкин. Ләкин һеҙ ризалашмаһығыҙ, ул бер ни ҙә эшләй алмай. Әгәр ҙә банк үҙалы кредит килешеүе шарттарын насарайтһа (процент ставкаһын арттырһа, ҡайтарып биреү ваҡытын үҙгәртһә һәм башҡалар), һеҙ үҙ хоҡуғығыҙҙы Рәсәйҙең ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау ойошмаһында йәки судта яҡлай алаһығыҙ.

Яңы ойошма кредитты нәк уға ҡайтарып биреүҙе белдереп, һеҙҙең исемгә хат ебәрергә тейеш. Ошо ваҡыттан алып кредитты ҡайтарыу яңы билдәләнгән банктың күрһәтмәһе буйынса башҡарыла. Әгәр ҙә иҫкәртеү булмаһа, кредитты ҡайтарыуҙың яңы ысулын аңлатыуҙарын һорап, Рәсәй Үҙәк банкының урындағы ойошмаһына мөрәжәғәт итегеҙ. Унда ла асыҡлыҡ индермәһәләр, кредит алған банктың ваҡытлыса хакимиәтенә (администрацияһына) аҡса күсереү өсөн яңы реквизиттарҙы һорап, заказлы хат ебәрегеҙ. Кредит алыу һәм уны кире ҡайтарыу менән бәйле бар документтарҙы ла оҙайлы ваҡыт дауамында һаҡларға һәм кредитты ҡайтарып бөткәс, банктан бурысығыҙ юҡлығы хаҡында белешмә алыу мөһимлеген дә онотмағыҙ.

## КАРТАНАН АҠСА УРЛАЙҘАР

**Мутлашыусыларҙың банк карталарынан аҡса урлау күренеше артҡандан арта бара. Әгәр ҙә ошондай хәл менән осрашырға тура килһә, аҡсамдан бөтөнләй ҡолаҡ ҡағам булып сығамы инде?**

- Ысынлап та, элек былдай осраҡта аҡсаны кире ҡайтарыу бик ауыр йәки бөтөнләй мөмкин түгел ине. Ләкин ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан банк карталарынан аҡсалары юғалған клиенттарына аҡсаны ҡайтарып бирергә бурыслы. Ләкин быны өсөн банкка бер тәүлек эсендә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Шулай уҡ банк үҙ клиенттарын карта менән башҡарылған бөтә төр операциялар буйынса ла оператив рәүештә хәбәр итергә бурыслы.

## ЕРҘЕ НИСЕК ҺАТЫП АЛЫРҒА?

**Беҙ баҡса ширҡәтендә ер биләмәһе һатып алырға уйлайбыҙ. Унда бер нәмә лә төҙөлмәгән. Ер биләмәһе хужаһының ҡулында бары тик ерҙең үҙмилектә булыуы хаҡындағы танытма ғына бар. Беҙгә ерҙе нисек һатып алырға - ышаныс ҡағыҙы ашамы йәки һатыу-һатып алыу килешеүе буйынсамы?**

- Һеҙгә һатыу-һатып алыу килешеүе төҙөү ҡулай буласаҡ. Әгәр ҙә юридик яҡтан дөрөҫ килешеү төҙөй алмайбыҙ, тип уйлаһағыҙ, ярҙам һорап, юрисҡа мөрәжәғәт итегеҙ. Килешеү төҙөлгәс, ер биләмәһен һатыусы менән бергә шәхесте раҫлаусы документтарығыҙҙы алып, Росреестрға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Унда, үҙмилек хоҡуғын һеҙҙең исемгә күсереүҙе һорап яҙған ғаризағыҙҙы ҡабул иткән белгес янында, һатыу-һатып алыу килешеүенә ҡул ҡуйыла.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк тулғанда

❖ Һары умырзая үләне, вахта үләне япрағы, бәйғәмбәр тырнағы сәскәһе, үрмә клевер сәскәһе, мелисса үләне, арыҫлан ҡойроғо үләне, омела үҫентеләре, еҫле балтырған япрағы, ҡайын япрағы, ыҙыҡ быуын үләне - тигеҙ өлөштә. 6 г үләнгә 300 мл ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнап ултырған һыулы һауытта 15 минут тоторға, 2 сәғәт йылы урында төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашағандан һуң 60-70 мг эсергә.

❖ Эноләк емеше, ҡыр еләге үләне, еркәүек (лабазник) үләне, рута үләне, фенхель емештәре, якорцев үләне, мышар сәскәһе, быуын сәскә (цикорий) тамыры, аҡтамыр тамыры, аҡ тал ҡайырыһы, тиле кишер (дымянка) үләне - тигеҙ өлөштә. 6 грамм үләнгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 3 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4-5 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда йылы көйөнсә 50 мл эсергә.

❖ Ҡайын еләге япрағы, ыныйы сәскәһе япрағы, мелисса үләне, әнис үләне, омела үҫентеләре, дегәнәк тамыры, шинмәсгөл (бессмертник) сәскәләре, алма ҡабығы, һаҙанаҡ (багульник) үҫентеләре, һабын үләне (мыльнянка) тамыры, арса (вереск) үләне - тигеҙ өлөштә. 8 г үләнгә 350 мл ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнап ултырған һыулы һауытта 10 минут тоторға, термоста 4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 5-6 тапҡыр йылы көйөнә 50-шәр мл эсергә.

### Миокард инфаркты

❖ Гөлйемеш емеше, бесәй үләне тамыры, ҡандала үләне, туғай клеверы, ерегүлән (лабазник), мелисса япрағы, рауза сәскәһе таждары, боланут (кипрей) япрағын бер тигеҙ алып, болғатырға. 7 грамм үләнгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут ҡайнар һыулы һауытта тоторға, 2 сәғәт йылы урында төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр 1/4 стаканлап эсергә.

❖ 10-ар грамм гөлйемеш сәскәһе, вахта үләне япрағы, ҡандала үләне, урман еләге япраҡтары, сәскәһе; 5-әр грамм бәйғәмбәр тырнағы сәскәһе, бөтнөк япрағы, әнис орлоҡтары, еҫле балтырған (сныть) япрағы. Үләндәрҙе бергә ҡушып болғатырға. 6 грамм үләнгә 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, һыулы һауытҡа ултыртып 10 минут йылытырға, 1 сәғәт йылы урында төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда йылы көйөнә 1/3 стакан эсергә.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КӨНКҮРЕШ ЙОЛАЛАРЫ

**Төшкө аш ваҡытында һалма, ыумас, ярмалы аш йәки бутҡа әҙерләгәндәр. Хужабикә ҡоймаҡ, күмәс, бәрәмәс, бәлеш бешергән. Ит булмағанда бойҙай бутҡаһы, боламыҡ йәки ҡатыҡ менән ризыҡланғандар.**

Йәйен төп ризыҡтарҙың береһе булып ҡымыҙ тора. Уны көнө буйы эскәндәр, сөнки ул һыуһынды яҡшы ҡандыра, аш һеңдереүгә булышлыҡ итә. Киске һауындан һуң киске аш әҙерләнгән, унда ла төп урынды сәй алып торған. Киске аш мәле самауыр янында төрлө әңгәмәләр ҡороп, оҙаҡ ултырғандар. "Өйҙөң көйө самауыр янында", - тип, көндәлек эштәрҙән ял иткәндәр. Хәлле ғаиләләрҙә ваҡыты-ваҡыты менән киске ашҡа махсус һарыҡ һуйылған, бай табын әҙерләнгән, ҡунаҡтар саҡырылған. Йоҡларға ятыр алдынан сәй, ҡымыҙ, ҡатыҡ йәки айран эсеп алғандар. Йома көн изге һаналғанға күрә, был көндә табындар айырыуса байрамса төҫ алған. Кесе йома хужабикәләр йортто йыйыштырған, ҡамыр ҡуйған, ә йома иртән тороп икмәк, ҡоймаҡ бешерелгән, һөт ризыҡтары әҙерләнгән. Төшкә ҡарай аш һалынған, самауыр ҡуйылған, был көндө ҡунаҡҡа ла йөрөшкәндәр.

Башҡорт ғаиләһенең традицион менюһы миҙгеленә ҡарап, үҙгәреп торған. Хужалыҡ алып барыу йылы уларҙа ике ҙур миҙгелгә: яҙ-йәй һәм көҙ-ҡышҡа бүленгән. Тәүге миҙгел иртә яҙ башланып, ҡара көҙгә тиклем дауам иткән. Был мәлдә һөт, ҡымыҙ һауыу, шулай уҡ ҡырҙа үҫкән емеш-еләк йыйыу эштәрен башҡарғандар, ултыраҡ тормошта йәшәгәндәре сәсеү-урыу менән булышҡан. Туҡланыу менюһын витаминлы ризыҡтар менән төрләндергәндәр һәм байытҡандар. Йылы көндәрҙә иркенләп йәйләүҙә йәшәгәндәр. Уның урынын ололар кәңәшләшеп, алдан билдәләгән. Йәш ғаиләләр һәм йәш-елкенсәк алдан барып, тирмәләрҙе ҡорған, аш-һыу әҙерләгән. XX быуат башына тиклем һәр йәйләүҙә патриархаль көнкүрештең бер элементы - икмәк өсөн ялан мейестәре һаҡланған. Унда ғаиләләр сиратлап икмәк бешергән. Ҡалған ризыҡ һәр кемдең үҙ торлағында, ҡаҙанда әҙерләнгән. Яҙғы-йәйге рационда һөт аҙыҡтары мул булған, көҙгә ҡарай һауым кәмеү сәбәпле, улар ҙа кәмегән. Бойҙай, ярма, он ризыҡтары йәйҙең икенсе яртыһында күбәйгән. Әйткәндәй, XIX - XX быуатта хужалыҡтың хәленә ҡарамайынса, һәр йортта ондан бешерелгән ризыҡтар төп урынды алып торған, сөнки урман-таулы, далалы яҡтарҙа ла баҙарҙарҙа ситтән килгән ондо һатып алып булған. Уңыш насар булған йылды һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ менән күберәк шөғөлләнгәндәр.

Көҙгө-ҡышҡы рацион иһә йәй әҙерләп ҡуйылған ҡорот, һары майҙан, он ризыҡтарынан, ярманан, йорт хайуандарының итенән торған. Көндәр ныҡлап һыуыныу менән һәр йортта тиерлек һуғым һуя башлағандар. Һалҡында йылҡы ите организмды йылытҡанын да яҡшы белгәндәр, шуға йылҡы итенән әҙерләнгән ризыҡтар өҫтөнлөклө һаналған.

Йәй ҡымыҙҙы күпләп эсһәләр, һыуыҡ мәлдә хужабикәләр буҙа әҙерләгән. Сәй табындары был осорҙа ла дауам иткән. Яҙға ҡарай һыйырҙар быҙаулаған һәм сәй табындары һөтлө ризыҡтар менән байытылған.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*БАЛАЛАР ҠОРО*

# ИҠТИСАДТА ЛА...

## кешелеклек сифаты булыу мөһим

(Башы 5-се биттә).

**Илида:** Мин дә айырым уҡыу яҡшыраҡ, тип уйлайым. Лицейҙың егеттәре физика, математика, информатика фәндәрен яҡшы белә, төрлө роботтар эшләйҙәр, программалар яҙалар, халыҡ-ара, Рәсәй, ҡала кимәлендәге олимпиадаларҙа урындар яулайҙар. Был уларҙың үҙ-ара сәмләнеп, ярышып ҡына түгел, бер-береһенә ярҙам итеп уҡыуынан да киләләр. Иҡтисад буйынса төрлө форумдар беҙҙә нисек ҡыҙыҡлы үткәнен белһәгеҙ! Быйыл, мәҫәлән, һәр ҡатнашыусы үҙенең тыуған районының иҡтисади проблемаларын барлап, уларҙы хәл итеү юлдарын күрһәтте.

**➔ Райондарҙа үҙ эшен асырға телләгән эшҡыуарҙарға ҡыҙыҡ булыр - бәлки, гәзит аша ошо йәһәттән дә уйҙарығыҙ менән бүлешерһегеҙ?**

**Айнур:** Мин кешеләрҙең эш эҙләп ауылдан ҡалаға килеүҙәренә аптырайым. Ауылда, киреһенсә, үҙ-үҙеңә эшләү өсөн шарттар күберәк, ана, күпме баҫыуҙар буша ята. Шулай уҡ ауыл халҡы бизнес тигәндә аҙыҡ-түлек магазины асыуҙы ғына күҙ уңында тота. Шуға беҙҙә тап шул йүнәлештә эшләүселәр күп. Бәләкәй генә ауылда ла бер-береһенә конкурент булған бер нисә магазин бар. Быйылғы форумда мин дөйәғош үрсетеү фермаһы тураһында ғилми эш башҡарғайным. Уны ҙурыраҡ ҡалаға яҡын төҙөү уңышлы. Бизнес-планымда күпме сумма кәрәк, банктан кредит алһаң, проценты күпме була, ҡайҙан бина табырға, ҡайҙан дөйәғош һатып алырға - барыһы ла иҫәпләнгән. Республикала әле ошондай ҡыҙыҡлы эш менән шөғөлләгән кеше бар, ул Рәсәйҙә иң яҡшы 5 ауыл хужалығы исемлегенә ингән.

**Илида:** Эшһөйәр булғандар донъяһын яҡшы итеп көтә. Мәҫәлән, ауылда минең күршеләремдең 27 баш һауын һыйыры бар. Тик был тиклем малды ҡарау өсөн күп тырышлыҡ кәрәк. Шуға ла күптәр еңелерәк юлдар эҙләй. Минеңсә, ауыл ерендә шиномонтаж, сәс ҡырҡыу салондары кеүек бәләкәй генә хужалыҡтар килемле буласаҡ. Минеңсә, кешенең нисек йәшәүе уның үҙенән тора, дәүләт тәьмин итмәй, тип ултырыу дөрөҫ түгел. Йолаларҙы онотторға ярамай, әммә милли йүнәлештәрҙе заманса кимәлгә күтәрергә өйрәнергә лә тейешбеҙ.

**➔ Лицейҙа йыл һайын "Финанс белемлелек" аҙналығы үтә. Бөгөн халыҡтың финанс яҡтан белеме ниндәй кимәлдә һәм уларҙы иң тәүҙә ниндәй һорауҙар борсой, тип уйлайһығыҙ?**

**Айнур:** Мине халыҡтың күпләп кредит тарихтарына батыуы хәүефкә һала. Мин кредитты бөтөнләй алмаҫ инем, сөнки уны күберәк итеп ҡайтарырға тейеш булаһың. Бер аҙ көтөргә, кәрәкле сумманы йыйырға мөмкин, өләсәйҙәр әйтмешләй, сабыр булһаң, барыһы ла була. Был ваҡыт эсендә хаҡтарҙың осһоҙланыуы ла бар. Фатир кеүек эре әйбергә кредит алһалар ярай инде, ваҡ әйберҙәр - кер йыуыу машинаһы, машинаға аҡсаны йыйыу ҡулайлыраҡ. Маҡсат булһа, йәшәүе лә күңелле. Көнкүреш техникаһы һатҡан магазиндар иҫке техника ҡабул итеп тә халыҡты алдаштыра. Әлбиттә, ауыл эргәһендә сүплектә туҙып ятҡансы, ул һыуытҡысты ҡалаға алып барып, яңыһына алыштырыу, экология йәһәтенән ҡарағанда, дөрөҫерәк инде.

**➔ Башҡортостандың, Өфөнөң бөгөнгө социаль-иҡтисади хәленә ниндәй баһа бирер инегеҙ?**

**Алина:** Хәлебеҙ яҡшы, тип иҫәпләйем, сөнки республика килеменең күп өлөшө Мәскәүгә, төрлө төбәктәргә китә. Әле Ҡырымға күпме ярҙам күрһәтәбеҙ. Башҡаларҙы ҡарарлыҡ булғас, иҡтисади хәлебеҙ көйләлөр, моғайын.

**Айнур:** Республиканың иҡтисади хәленә килгәндә, әле тотороҡло ла, шулай ҙа алға китеш тә булырға тейеш. Ниндәйҙер етештереүсе заводтар булдырырға кәрәк, тиер инем, Кроношпан күпме һорау тыуҙырҙы. Уны Өфө эргәһенә түгел, былай ҙа экологияһы маҡтанырлыҡ булмаған төбәктә төҙөргә ине. Йәмғиәттең үҙ фекерен белдереүе, гражданлыҡ бурыстарын үтәүе яҡшы күренеш. Мин Черниковкала йәшәйем, иртәнсәк тышҡа сығыу менән һауаның газлы икәнен тоям. Тимәк, бынан нисектер ҡотолорға кәрәк. БРИКС үткәндән һуң, Өфөнөң популярлығы артасаҡ, был үҙ сиратында беҙгә студенттарҙы күпләп йәлеп итер, тип уйлайым. Уҡып бөткәс, шулай уҡ Өфөлә ҡалырға уйлайым, ватансылыҡ тойғолары ла роль уйнай, атай-әсәй яҡын. Иҡтисадсы бит мин, иҫәпләп ҡарайым да, Санкт-Петербург матур, әммә ҡыйбат ҡала, ә Мәскәүҙә һулар һауа ла таҙа түгел.

**Илида:** Тәбиғәт беҙгә мәрхәмәтле, беҙ ҙә уға ихтирамлы ҡараштa булырға тейешбеҙ. Бөгөн заводтар түгел, төрлө ҡунаҡханалар төҙөлә икән, тимәк, республика үҙенең киләсәген туризм кеүек йүнәлештә күрәләр. Кешелеклелек тәүге урынға ҡуйылһа ғына киләсәгебеҙ яҡты буласаҡ. Ер аҫты байлыҡтары мәңгелек түгел, үҫеш өсөн башҡа юлдар эҙләргә кәрәк.

**Айнур:** Донъя кимәлендә туризмдан килем нефттекенә тигеҙ, тип ишеткәйнем. Бәлки, беҙҙә күңел асыу парктары күберәк төҙөргәләр?

**Илида:** Туризм менән генә йәшәүҙе күҙ алдына килтереүе әллә нисек бит әле. Эйе, беҙ ҡунаҡсыл халыҡ, шулай ҙа гел ҡунаҡтар менән генә йәшәп булмай бит. Ҡунаҡтың мөҙҙәте өс көн, өс көндән һуң ул муйнаҡҡа әүерелә, тиҙәр бит әле. Төркиә тураһында хәҙер ниндәй генә лаҡаптар юҡ, уны етди, нимәлер эшләргә һәләтле дәүләт итеп ҡабул итеүе ауыр. Беҙҙә ундағы кеүек булмаһын инде. Тыныс ҡына, үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ күреп, йәшәп ятабыҙ. Матур тәбиғәтебеҙҙе башҡалар ҙа күреп һоҡланырға тейештер, бәлки, ләкин быларҙың барыһы ла сама менән булһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, иҡтисад лицейын тамамлаған һәр кем эшҡыуар, иҡтисадсы булып китмәһә лә, иҡтисади яҡтан әүҙем булған һәм иҡтисади мәсьәләләрҙе аҡыллы хәл итә алған йәштәребеҙ был сифаттары менән хеҙмәт баҙарында үҙенең лайыҡлы урынын табасаҡ. Йәштәребеҙҙең төплө яуаптары тап ошоно раҫлай ҙа инде. Үҙҙәре әйтмешләй, донъяла матди ҡиммәттәрҙән дә өҫтөн нәмәләрҙе - тыныс тормош, һулар һауа һәм кешелеклек сифаттарын ғына юғалта күрмәйек.**

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ОҪТАЛЫҒЫҢДЫ...

## файҙалана ла бел



**Ҡыҙ кешегә ҡырҡ төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр. Аш-һыуға оҫталыҡ, йорт-ҡураны сынъяһау, бөхтә итеп тотоу, сигеү һәм бәйләм менән булыу ҡатын-ҡыҙҙы уңған хужабикәләр рәтенә индерә. Берәүҙәр иһә ҡулдары белгән шөғөл менән аҡса ла эшләп кинәнә.**

Әсәйҙән күргән - тун бескән, тигәндәй, мин дә бәләкәйҙән ҡул эштәре менән ҡыҙыҡһынып үҫтем. Бигерәк тә ырғаҡ һәм энә менән төрлө әйберҙәр бәйләү күңелемде яуланы. Шуға күрә апайым күберәк аш-һыу тирәһендә маһирлығын камиллаштырһа, минең бер ҡулда - китап, икенсеһендә ырғаҡ булыр ине. Тырышып өйрәнгән шөғөлөм бөгөнгө көндә бик тә ярап ҡалды: мин ырғаҡ менән үҙемә лә, заказдар буйынса ла төрлө әйбер бәйләйем. Үҙең бәйләгән әйбер һәр ваҡыт модала, ул һәр саҡ һоҡланыулы ҡараштарҙы үҙенә йәлеп итә. Шулай уҡ ҡулдан эшләнгән әйберҙе бүләк итеүе лә күркәм, сөнки ул үҙенсәлекле һәм затлы, оригиналь була.

Ҡул эштәремдә биҙәктәрҙе, модель фасондарын ҡабатламаҫҡа тырышам. Пальто, шәл кеүек өҫ кейемдәренән башлап, башлыҡ, шарф, кофта, жилет, күлдәк-сарафан, ойоҡбаш һәр саҡ үтемле. Шулай уҡ өҫтәл, ултырғыс япмалары, мендәр тыштары, тәҙрәгә тюль һәм ҡорған, келәм, салфетка кеүек әйберҙәр ҙә зауыҡлы хужабикәләр иғтибарынан ситтә ҡалмай. Бер кемде лә ҡабатларға яратмаған ир-егеттәр ҙә бүләк өсөн ырғаҡ менән бәйләнгән әйберҙәрҙе күп һайлай. Шулай уҡ улар өйҙәрендә лә ошондай әйберҙәрҙең булыуын теләй. "Өйгә йәйғор тулғандай була", тиҙәр улар.

Күҙ нурыңды түгеп бәйләгән һәр әйбер ҡәҙерле, сөнки бар йылыңды һалып, һәр күҙен нағышлап йән өрәһең уға. Ҡул эше менән булыу, бер яҡтан, күңел кинәнесе бирә, икенсенән, матди файҙаһын да күрәһең. Шуға күрә ҡатын-ҡыҙҙарҙы үҙҙәренең оҫталыҡтарын килемле шөғөл итергә саҡырам. Ҡулың эш белә икән, уны күрһәтә лә, файҙаһын да күрә белергә кәрәк, тигән фекерҙәмен.

**Әлфиә ҺАТЛЫҠОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

✓ *1905 йылда Өфөлә лә батша исеменә мөрәжәғәт яҙыла. Мөрәжәғәттә мосолмандарға ҡарата сәйәсәтте үҙгәртеү, башҡорт ерҙәрен һатыуҙы тыйыу, ерһеҙ тороп ҡалған башҡорттарҙың ер мәсьәләһен хәл итеү һорала.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Революцияның Башҡортостанға, башҡорт халҡына йоғонтоһо, милли хәрәкәттең барлыҡҡа килеүе һәм халыҡтың үҙаңы күтәрелеүгә сәбәп булған тарихи осор менән тарих фәндәре кандидаты Нурислам Мирхәйҙәр улы ҠАЛМАНТАЕВ таныштыра.**



# ХАЛЫҠТЫҢ ҮҘАҢЫ КҮТӘРЕЛЕҮГӘ...

## революция осоро ла сәбәпсе

### Революция тулҡындары - Башҡортостанда

Петербург эшселәрен атыу бар Рәсәй буйлап сыуалыштарға килтерә. 1905 йылдың 12 гинуарында Өфөлә 200 кешенән торған митинг ойошторола. Өфөлә һәм губернала революцион сығыштар башланып китә. Социал-демократтарҙың эшселәр менән йыйылыштар үткәреүе, самодержавиены ҡолатырға саҡырыуҙар йышая. Улар үҙҙәренең пропаганда эшен төбәктең милли үҙенсәлегенә ҡарап алып бара. 1905 йылдың 16 мартында эсерҙар тарафынан "Мосолмандарға!" тигән прокламация әҙерләнә. Унда: "Мосолмандар, Рәсәйҙә ниндәй заманалар еткәнен һәм ниндәй эштәр эшләнгәнен беләһегеҙме? Урыҫтар һәм поляктар йоҡламай, халыҡ хоҡуҡтарын яҡлап, әүҙем эш алып бара, үҙ талаптарын ҡуя". Прокламация мосолман эшселәрен иҫкергән дәүләт ҡоролошо менән көрәшергә саҡыра: "Мосолман эшселәре, забастовкаға сығығыҙ, урыҫ эшселәренә ҡушылығыҙ һәм үҙегеҙҙең хәлегеҙҙе яҡшыртасаҡ талаптарығыҙҙы ҡуйығыҙ. Йоҡонан уянығыҙ, хәрәкәт итегеҙ. Халыҡ файҙаһы өсөн тырышығыҙ! Рәсәйҙә ялған юҡҡа сыҡһын һәм хәҡиҡәт менән ғәҙеллек еңеп сыҡһын!". Шул уҡ осорҙа Ырымбурҙа татар телендә лә прокламация әҙерләнә. Унда: "Дөйөм көрәш һуңынан берҙәм азат тормош ҡорор өсөн алып барыла. Иркеле хоҡуҡи дәүләттә һәр милләт үҙбилдәләнеш хоҡуғын аласаҡ һәм властар яғынан айырым милләттәрҙе ҡыҫырыҡлау булмаясаҡ", - тиелә. Социал-демократтарҙың прокламация-листовкалары халыҡ араһында ныҡ тарала, Башҡортостандың төпкөл ауылдарына тиклем үк барып етә.

1905 йылдың йәйендә Ырымбур һәм Өфө губерналарында барыһы 31 забастовка үтә. Уларҙа иҡтисади талаптар ғына түгел, сәйәси талаптар ҙа яңғырай. Мәсәлән, Ҡатау-Иван заводы эшселәре бөтә халыҡ ойоштороу йыйылышы үткәреп, енескә һәм дингә ҡарамайынса, дөйөм тура һайлауҙар үткәреүҙе талап итә. Ошо уҡ йылдың көҙөндә революцион хәрәкәт яңы баҫҡысҡа күтәрелә. Мәскәүҙә һәм Петербургта башланған сәйәси стачка империяның барлыҡ сәнәғәт үҙәктәрен һәм тимер юлдарын ялмап ала. Был стачка батша власын сигенергә мәжбүр итә. 1905 йылдың 17 октябрендә Николай II сәйәси азатлыҡтар биреү буйынса манифест ҡабул итә. Унда: "1. Даровать населению незыблемые основы гражданской свободы на началах действительной неприкосновенности личности, свободы совести"; 2. Привлечь ... к участию в Думе ... те классы населения, которые ныне совсем лишены избирательных прав...; 3. Установить как незыблемое правило, чтобы никакой закон не мог воспринять силу без одобрения Государственной Думы...", тигән пункттар ҙа була.

### Ҡара груһсыларҙың әүҙемлеге

Эшселәрҙең сығыштары әүҙемләшкән һайын, монархия көстәренең сығыштары ла арта. Өфө һәм Ырымбур губерналарында ҡара груһсы милләтселәренең ойошмалары төҙөлә башлай. Улар сәйәси демагогияны ҡулланып, рус халҡының патриотик тойғолары менән файҙаланып, милләтселекте ҡорал итеп ала. Ҡара груһсылар батшаны, православиены, йәшәгән дәүләт ҡоролошон яҡлап сығыш яһай. Православие руханиҙары уларҙың терәге була.

Сиркәү руханиҙары 17 октябрь манифесын ҡабул итә алмай, уға дошманлыҡ менән ҡарай, хатта уның (манифестың) ялған булмауына инанып өсөн махсус рәүештә губернаторға үҙ кешеләрен дә ебәрәләр. Уларға башҡа милләттәрҙең, диндәрҙең православие дине, урыҫтар менән тиң хоҡуҡтарға эйә буласағы оҡшап етмәй. Монархистар Өфөлә ҡайһы бер чиновниктар ярҙамы менән "Общество русского народа" тип аталған ойошма төҙөй. Был ойошманың төп тактикаһы емереүҙәр була. Улар либералдарҙы һәм революционерҙарҙы әҙерләкләүе, йәһүҙи погромдарын ойоштороуы менән билдәле. Улар сәйәси оппоненттарының ғүмерен өҙөүгә тиклем барып етәләр, Өфө губернаторының 17 октябрь манифесын ҡабул итеүен дә ғәфү итә алмайҙар.

### Мосолман халыҡтарының уяныуы

Мәҙәниәт, тел, йолалар, дин өлкәһендәге ҡыҫырыҡлауҙар һәм көсләп урыҫлаштырыу сәйәсәте XX быуат башында мосолман халыҡтарының үҙаңы күтәрелеүгә килтерә. Был хәрәкәт 1905 йылдағы петицион кампания менән башланып китә. Мосолман йәмғиәтселеге Ислам диненә ҡараған халыҡтарҙың ихтыяждары тураһында хөкүмәткә еткерә. Улар был мәсьәләләрҙең тыныс юл менән, самодержавие ҡоролошо сиктәрендә хәл ителеүенә өмөт бағлай. Ошо ваҡытта төрлө өйәҙҙәрҙә сходтар үткәрелә башлай. 1905 йылдың йәйендә Өфөлә лә йыйылыш үтә. Унда батша исеменә мөрәжәғәт яҙыла. Мөрәжәғәттә мосолмандарға ҡарата сәйәсәтте үҙгәртеү, башҡорт ерҙәрен һатыуҙы тыйыу, ерһеҙ тороп ҡалған башҡорттарҙың ер мәсьәләһен хәл итеү һорала.

Ошо йылдың 15 августында Түбәнге Новгород ҡалаһында "Мосолмандар иттифағы"ның беренсе йыйылышы үткәрелә. 120 делегат Рәсәй мосолмандарының проблемалары хаҡында фекер алыша. Рәсәй хөкүмәте "Мосолмандар иттифағы"ның икенсе йыйылышын үткәреүгә рөхсәт бирмәй. Шуға күрә лә 1906 йылдың ғинуар айында мосолмандар йәшерен рәүештә йыйыла. Өсөнсө съезд ошо уҡ йылдың августында Түбәнге Новгород ҡалаһында үткәрелә. Икенсе һәм өсөнсө съезда "Мосолмандар иттифағы"ның уставы һәм программаһы раҫлана. Ойошма Рәсәй мосолмандарының берләшеүен яҡлай һәм үҙенең маҡсаты итеп башҡорттарға, татарҙарға һәм мосолман булған башҡа төрки халыҡтарға урыҫтар менән тиң хоҡуҡтар бирелеүен талап итә. Дөйөм алғанда, мосолман хәрәкәтенең асылы дәүләттән тиң хоҡуҡтар бирген конституция ҡабул итеүгә, уҡытыу эшендә, әҙәбиәттә һәм мәҙәниәттә ирекле эш алып барыуға, иркен рәүештә үҙ диндәрен тота, аңлата һәм һаҡлай алыуға һәм демократлаштырыуға йүнәлтелгән 17 октябрь манифесының талаптары үтәлеүен, гарантияһын талап итеүгә ҡайтып ҡала.

Мосолман хәрәкәте Ислам динен тотҡан, Рәсәйҙең көнсығышында йәшәгән төрки халыҡтарҙың милли-мәҙәни һәм дини автономияһы булыуы өсөн көрәш алып бара. Мосолман йәмғиәтселегенең рухи үҙбилдәләнеш көсәйгән Думала ултырған мосолман депутаттары сығыштарынан да күрергә була. Мәсәлән, улар 1906 йылдың 24 мартында Дәүләт Думаһы рәйесе исеменә "Об отмене Правил 31 августа 1906 г. о начальных училищах инородцев" тип аталған ғариза яҙа. Унда: "Начальные училища учреждаются не для того, чтобы детям инородцев дать возможность обучаться всеобщей грамоте, в которой они действительно нуждаются, а для того, чтобы исключительно распространить среди инородцев знание русского языка... Но как бы сильно сознание необходимости русского языка не чувствовалось, немыслимо допустить, чтобы знание этого языка приобреталось ценой потери и забвения родного языка или чтобы, в лучшем случае, родной язык служил для этого лишь орудием", - тип әйтелә.

Тап Ислам дине мосолман халыҡтарының телдәренең, мәҙәниәттәренең, йолаларының һаҡланып ҡалыуын тәьмин итә. Шуға күрә лә Рус православие сиркәүенең миссионерлыҡ эшендә әүҙемлек күрһәтеүе һәм дәүләт рычагтарын файҙаланып, үҙ диненә башҡаларҙы йәлеп итергә теләүе башҡорттар, татарҙар һәм башҡа мосолман халыҡтары тарафынан үҙҙәренең милли үҙенсәлегенең, рухи тамырҙарының юғалтыуына килтерәсәк кампания кеүек ҡабул ителә. Дәүләттә башланған революцион үҙгәрештәр хөкүмәттең мосолмандарға ҡарата ҡарашын үҙгәртә. 1905 йылдың апрелендә православие диненә көсләп суҡындырылған мосолмандарға ҡабаттан Ислам диненә ҡайтырға рөхсәт бирелә, шуға күрә лә революция осоро кешеләрҙең православие диненән күпләп сығыуы менән дә билдәләнә.

Урыҫлаштырыу һәм хөкүмәт менән сиркәүҙең миссионерлыҡ сәйәсәте төбәктең мосолман халҡында ҡаршылыҡ тыуҙыра, сыуалыштарға килтерә. Мәсәлән, 1907 йылдың 6 февралендә Борай ауылында Першин исемле стражник (революцияға тиклем Рәсәйҙә ауылдағы иң түбән полиция чины) дини китаптар һатып торған Шабай ауылы башҡортона килеп, ике китабын йыртып ырғыта. Першиндың ҡылығына шаҡ ҡатҡан башҡорттар, уның ни өсөн былай эшләүен аңлатыуын һорайҙар. Ул тиҙ генә ҡасып, башҡа полицейскийҙар менән бер йортта бикләнә. Асыуланған халыҡ ғәйеплене сығарыуҙарын һорай, әммә быны урынына полицейскийҙар ҡорал ҡуллана һәм бер кеше үлтерелә. Юғарыға, Үҙәккә иһә, башҡорттарҙың бунты хаҡында телеграмма ебәрелә. Икенсе көндә ауылға прокурор ярҙамсыһы менән 50 стражник килеп төшә.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 22-се һанда).**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

### Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Башҡорттарҙың даими торлағының иң ябайы - ҡәҫ өй. Уны төҙөгәндә арҡырыға, буйға 4-5 метр дүрт мөйөшлә, 20 - 40 сантиметр тәрәнлектә ер ҡаҙыла һәм стена урынына ике метр бейеклектә ҡәҫ өйөлә. Уларға арҡыры һалынған 5 - 9 һайғауға нығытылған өлкә түбәне тотоп торорға тейеш. Түбә сыбыҡ-сабыҡтан, ҡамыштан йәки туҙҙан ябыла, өҫтөнә ҡәҫ һалып ҡаплап ҡуйыла. Ғәҙәттә, бындай өйҙәрҙә ҡыйыҡ ябылмай, әммә ҡайһы берҙә ҡәҫ ике яҡлы итеп һалына. Түбә итеп һалынған ҡәҫ ауыр булғанлыҡтан, урталағы һайғау өй эсенән бағана менән терәтелеп, нығытыла. Эске яҡтан ҡәҫ өй балсыҡ менән һылана. Стеналарҙың береһенә бер яҡҡа асылған ишек ҡуйыла. Уға ҡаршы яҡта тәҙрә уйыла (һүрәт). Ишеккә яҡын мөйөшкә сыуал усаҡ сығарыла, икенсе



яҡҡа иһә көнкүреш кәрәк-ярағы урынлаштырыла, ҡайһы берҙә унда нарыҡ бәрәстәре һәм быҙауҙар тора. Ишеккә ҡаршы яҡты тулыһынса тиерлек иҙәндән 35-40 сантиметр бейеклектә киң урындыҡ алып тора (һүрәт). Ҡәҫ өйҙәрҙең таралыу районы сикле һәм улар бары тик урман булмаған ялан ерҙәрендә, ярлылар өсөн торлаҡ булараҡ осрай.



Саман өй, кирбес өй, балсыҡ өй ҡәҫ өйҙәрҙән әллә ни айырылмай; бары тик ҡәҫ урынына ваҡ һалам йәки кәбәккә балсыҡ ҡушып баҫылып, ҡояшта киптерелгән саман ҡулланыла. Кирбестәрҙе эшләгәндә балсыҡ ҡушылған һаламды аттарҙан тапаталар, һуңынан уларҙы һығып алып, ағас формаларҙа киптерәләр. Стеналар ҡәҫ өйҙәге кеүек күтәрелә, әммә кирбестәр араһына балсыҡ һылана; бындай өйҙәрҙең стеналары йоҡараҡ, йөҙө лә матурыраҡ (һүрәттәр). Ҡәҫ өйҙән айырмалы, саман өйҙә түбә лә, иҙән дә була. Түбә эшләү өсөн күтәртелгән стенаға арҡыры һайғауҙар һалына, уларға ҡайын ботаҡтары, һалам түшәлә, һалам өҫтөнә тупраҡ һалына. Түбәне тотоп тороу өсөн арҡыры стеналар араһына кирбестән бағана һалына. Унда буй һайғауҙар һәм асамай ята. Саман өйҙәрҙең ҡыйыҡтары ҡәҫ менән ябылғанлыҡтан, уның ике ҡанаты ла (яғы) остары бәйләнеп, атлама аша һалынған нәҙек ҡайын ботаҡтары менән ҡаплана. Ҡәҫ шыуып төшмәһен өсөн ҡыйыҡтың осона һайғау һалына. Ҡайһы бер осраҡта саман өйҙәрҙә иҙән һалынмай; ҡайһы берҙә ул таҡтанан һалына, бик һирәк уртаға ярылған һайғауҙарҙан йәки нәҙек бүрәнәнән эшләнә. Иҙән ер өҫтөнә түшәлә. Тәҙрәләр рамға ултыртылмай ғына ҡуйыла, ишектәр бер яҡҡа асылыусан. Өй эсендә ишек эргәһендәге мейеш төштәрҙең береһендә усаҡ йәки мейес сығарыла. Тәҙрә аҫтынан буйынан-буйына тәпәш урындыҡ эшләнелә. XX быуат башында саман өйҙәр ҡәҫ өйҙәргә ҡарағанда күберәк булһа ла, уларҙың да һаны кәмей. Улар, нигеҙҙә, халыҡтың ярлы өлөшөндә осрай.





✓ ***"Шүлгәнташ" территорияһы шундай изге урын, унда бөтөн нәмә үҙенсәлекле булырға тейеш. ЮНЕСКО-ға боронғо солоҡсолоҡ та тәҡдим ителгәйне. Ул да донъя кимәлендә беҙҙең бренд булып тора.***

# ЭТНОТУРИЗМ

**Һуңғы ваҡытта донъя практикаһында айырым халыҡтарҙың этник үҙенсәлектәре, йәшәгән ерҙәре, мәҙәниәте туристик брендҡа әүерелеп, "этнотуризм" тигән төшөнсәне барлыҡҡа килтерҙе. Башҡорт халҡын бөгөн дә үҙ мәҙәниәтенән, традицияларынан, йолаларынан, элекке көнкүрешенән айырым ҡарап та булмай икән, тимәк, республикала туризмдың тап ошо тармағы өҫтөнлөклө йүнәлеш алырға тейеш кеүек. Ни өсөн республикала туризм бизнесы үҫеше һүлпәнерәк тойола? Этнотуризм башҡорт донъяһын ситтәргә танытыуҙың бер ысулы була ала икән, уны үҫтереүҙә дәүләттең ярҙамы күпме булырға тейеш? Ошолар тураһында Башҡортостан Республикаһының күсемһеҙ мәҙәни милек объекттарын һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса ғилми-производство үҙәге директоры Данир ҒӘЙНУЛЛИН һәм Башҡортостан Республикаһының Туриндустрия берлеге рәйесе урынбаҫары, "Урал батыр" милли туроператоры етәксеһе Кинйә КҮСКИЛДИН менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**▸ Баҙар шарттарында туристик бизнесты үҫтереү өсөн дүрт төп шарт кәрәк тиҙәр: капитал, технологиялар, кадрҙар, ресурстар. Башҡортостаныбыҙҙа быларҙың барыһы ла бар кеүек, тик ни өсөн беҙ һаман да туризмды тейешле кимәлгә күтәреп, башҡорт донъяһын башҡаларға күрһәтә алмайбыҙ?**

**Д. ҒӘЙНУЛЛИН:** Туризм тейешле кимәлдә үҫешһен өсөн ошо шарттар, шул иҫәптән, объекттар ҙа кәрәк. Мәҫәлән, сит илгә сыҡһаң, унда диңгеҙҙән, тәбиғәттән, заманса отелдән тыш, төрлө боронғо ҡорамдарға, археологик ҡомартҡыларға экскурсиялар бар. Тимәк, туризмда матур тәбиғәт менән генә туристарҙы йәлеп итеп булмай. Әлегә беҙҙә бындай объекттар иҫәпле генә. Туристик объекттарҙы булдырыу - бөгөн төп мәсьәлә.

**К. КҮСКИЛДИН:** Мин был фекер менән килешмәйем. Бөрйәнде генә алһаҡ, Шүлгәнташ мәмерйәһе үҙе бер уникаль урын. Йылҡысыҡҡан күлен күрһәтеп, уның легендаһын һөйләһәң - шулай уҡ фәһемле һәм ҡыҙыҡлы сәйәхәт килеп сыға. Халыҡ ижадына бәйле урындар ғына ла күпме, тик беҙ уларҙы күтәрә белмәйбеҙ. Мәҫәлән, революция һәм граждандар һуғышына бәйләп, Баймаҡ районының Темәс ауылын күрһәтергә булыр ине. Бәлки, был объекттарҙың барыһы ла башҡа милләттәргә, шул уҡ рус халҡына аңлашылмаҫ - быныһы икенсе мәсьәлә. Бер тапҡыр федераль баҫмалар журналистарын Темәскә алып барҙым. Музейҙа батша һалдаттарына һәнәк менән ынтылған кешеләрҙең һындары бар, шуларҙы күреп аптырағандарын тоям, әммә бер нәмә лә өндәшмәйҙәр. "Аңлайһығыҙмы, ни өсөн башҡорт халҡы бөгөн дә илһөйәр, ни өсөн үҙ ерен, ғөмүмән, бөтөн Рәсәйҙе ярата? - тип һорайым уларҙан. - Сөнки беҙ шулай тәрбиәләнгәнбеҙ. Еребеҙҙе баҫыусыларға ҡаршы көрәштә йәнебеҙ ҙә йәл түгел, ил, ер тойғоһо көслө беҙҙә".

**Д. ҒӘЙНУЛЛИН:** Объекттар бар ҙа, ләкин уларҙы туристар ҡабул итерлек хәлгә еткерергә кәрәк. Шул уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһен алып ҡараһаҡ, йәйһеген унда көнөнә мендән ашыу кеше килә. Ә мәмерйәнең микроклиматы ул тиклем халыҡ ағымын күтәрә алмай. Шуның өсөн дә уның тирәһендә яңы музей комплекстары төҙөү кәрәк. Бөгөн Йылҡысыҡҡан күленең эргә-тирәһе шырлыҡҡа әйләнеп бөткән, берәү ҙә уны башҡорт өсөн изге урын тип әйтмәҫ. Күлде таҙартып, махсус һуҡмаҡтар түшәп, уның тарихы яҙылған таш ултыртып, Аҡбуҙаттың һәм "Урал батыр" эпосының башҡа геройҙарының һындарын төҙөп ҡуйһаң, ул туристарҙы үҙенә йәлеп итәсәк. Был йәһәттән эштәр эшләнә лә инде. Былтыр хөкүмәт ҡарары менән "Шүлгәнташ" тарихи-археологик музей-заповедниғы структураһында ойошторолған "Урал батыр ере" музей-туристик маршруты ошо мәсьәләрҙе хәл итеүгә йөҙ тотасаҡ та инде. Әлегә беҙ уның документтарын тәртипкә килтереү, территорияһын билдәләү буйынса эш алып барабыҙ. Бөрйән районына, уның элекке хакимиәт башлығы Динир Әсғәт улы Әхмәтйәновҡа рәхмәт, улар был проектты ыңғай ҡабул итте, урындағы етәкселектең райондың киләсәге туризм, "Шүлгәнташ" мәмерйәһе менән бәйле булыуын аңлауы эшебеҙҙе еңелләштерә. Проект менән 10 млн. һумлыҡ Президент грантына ла лайыҡ булдыҡ, ул эште башлап ебәреү өсөн ҙур этәргес буласаҡ.

"Шүлгәнташ" - ябай мәмерйә түгел, мәмерйә үҙе һәм уның территорияһы халҡыбыҙҙың тарихы, бөйөк эпосы, легендалары менән бәйле. Тап ошо мәмерйәгә Шүлгән инеп ҡасҡан, унда һыуҙың үлгән, терелгән урыны, Йылҡысыҡҡан күле - Аҡбуҙаттың, башҡорт аттарының һыу аҫтынан өҫкә сыҡҡан урыны бар. "Шүлгәнташ" мәмерйәһе ЮНЕСКО-ның тарихи ҡомартҡылар исемлегенә тәҡдим ителгәнен барыһы ла белә, беҙ хәҙер ныҡлап ошо номинацияны яҡларға әҙерләнәбеҙ. Быға өлгәшһәк, киләсәктә бөтөн донъяла "Шүлгәнташ"ты, Башҡортостанды, солоҡсолоҡто беләсәктәр, быларҙың барыһын да үҙ күҙҙәре менән күреү өсөн сит илдән туристар киләсәк. Уларҙы ҡаршы алыу, автобустарға ултыртып, Бөрйәнгә барып еткәнсе башҡа тарихи урындарҙы, мәмерйәнең үҙен, башҡа музей комплекстарын күрһәтеү - туроператорҙарҙың бурысы.



**▸ "Урал батыр" эпосы - ысынлап та донъя кимәлендәге әһәмиәткә эйә ҡомартҡы. Берлектә - тереклек идеяһын, йәшәүҙең, яҡшылыҡ менән яманлыҡтың асылын ғына түгел, халыҡтың рухи булмышын, әхлаҡи ҡиммәттәрен сағылдырыу йәһәтенән ҡиммәтле был эпос. "Урал батыр ере" музей-туристик маршруты төҙөүҙең төп маҡсаты нимәлә? Маршрутта туристар иғтибарына ниндәй объекттар тәҡдим ителәсәк?**

**Д. ҒӘЙНУЛЛИН:** Маршрут башҡорт халҡының матди һәм мәҙәни-рухи мираҫын һаҡлауға йүнәлтелә. Донъя баҙарында туризмдың өлөшө ҙур, ул бизнестың килемле төрө булһа ла, яңы мәҙәни-туристик үҙәк килем алыу маҡсатынан эшләнмәй, төп бурыс - ошо уникаль объектты һаҡлау. Тарихыбыҙ, үткәнебеҙ генә түгел, киләсәктә донъя йөҙөндә үҙебеҙҙе таный, таныта торған билдәбеҙ ул "Шүлгәнташ". Уны һаҡлау - дәүләттең дә, һәр беребеҙҙең дә бурысы.

Маршрут башҡорт халҡының тарихи һәм мәҙәни үҙенсәлектәрен сағылдырған тәбиғәт, этнографик, археологик, фольклор компоненттарҙан торасаҡ. Ә композицияның идеяһы эпостың сюжет линияһына тоташа. Музей комплекстарының барыһы ла башҡорт халҡына бәйләп, мәҫәлән, боронғо кешеләрҙең туҡталҡаһы икән, Йәнбикә менән Йәнбирҙе төйәге итеп эшләнәсәк. Йылҡысыҡҡан күле тирәләй парк зонаһы булдырып, "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпостары, башҡа легенда, риүәйәттәр геройҙары һындары ҡуйыласаҡ. Проектты эшләгән егеттәр Францияларғы, Испаниялағы Диснейлендты ҡарап ҡайттылар һәм башҡорт эпосы буйынса "Урал батыр ере"нең әлеге проектын тәҡдим иттеләр. Уны тормошҡа ашырыу биш йылға һуҙыласаҡ, быйыл иһә ике музей - "Шүлгәнташ" мәмерйәһе музейы һәм солоҡсолоҡ музейын төҙөргә, Йылҡысыҡҡан күлен тәртипкә килтерергә планлаштырабыҙ.

"Шүлгәнташ" территорияһы шундай изге урын, унда бөтөн нәмә үҙенсәлекле булырға тейеш. ЮНЕСКО-ға боронғо солоҡсолоҡ та тәҡдим ителгәйне. Ул да донъя кимәлендә беҙҙең бренд булып тора. Солоҡсолоҡ музейының да проекты ҡыҙыҡлы килеп сыҡты. Киңлеге - 6, бейеклеге 10 метр түңәрәк бина солоҡ формаһында. Уның уртаһында кәрәҙ урынлашҡан, унда бал ҡортоноң бөтөн эшмәкәрлеге күрһәтелә. Бал ҡорто солоғононоң эсендә йөрөгән кеүек булаһың инде. Музейҙа солоҡсолоҡта ҡулланылған этнографик экспонаттар ҙа урын аласаҡ. Киләсәктә донъялағы иң ҙур был "солоҡ" Бөрйән районының бренды булып та китер, кем белә. Ҡалған объекттар ҙа үҙенсәлекле булыр, моғайын, БР Рәссамдар союзы менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ, күл тирәһендә урынлашасаҡ һындарға конкурс иғлан итергә уйлайбыҙ. Йәш архитекторҙар араһында Ер, Һыу, Ут, Һауа номинацияһында ағастан эшләнгән ҡоролмаларға конкурс башланды ла инде. "Урал батырҙың көс урыны" тип аталған был конкурсҡа ебәрелгән эштәр заманса ла булһын. Сөнки музей комплексында боронғолоҡтан күсереп яһалған ғына түгел, бөгөнгө яңы формалар ҙа булырға тейеш.

## "Урал батыр" бренды

**К. КҮСКИЛДИН:** Бөгөн "Урал батыр" брендын күтәреү өсөн берҙәм эш башланды. Республикала туристик күргәҙмәләр йылына ике тапҡыр ойоштороla. Быйыл "Урал батырҙың алтын билбауы" тигән туристик маршрут булдырып, шул күргәҙмәлә бөтөн туроператорҙар, тәбиғи парктар, тарихи-мәҙәни үҙәктәр алдында сығыш яһаныҡ.

**Д. ҒӘЙНУЛЛИН:** Иң ҡыҙығы, бығa тиклем Кинйә Сәғит улы менән күрешкәнебеҙ юҡ ине. Ул милли туроператор ойоштороусы булараҡ - "Урал батыр билбауы", беҙ музей-заповедник булараҡ, "Урал батыр ере" маршруты менән параллель рәүештә бер үк темаға тотонғанбыҙ. Тимәк, Урал батырҙың исеменә бәйле изге эштәр башҡарыу өсөн мөҙҙәт еткән һәм беҙ барыбыҙ ҙа бер юлдан барабыҙ.

**К. КҮСКИЛДИН:** Мин Силәбе өлкәһенә "Урал батырҙың бишеге" тигән төбәк-ара туристик маршрут эшләйек, тигән тәҡдим менән сыҡҡайным. Алда әйтелгән күргәҙмәлә асыҡланыуынса, "Ирәмәл" тәбиғи паркы етәксеһе Римма Талха ҡыҙы Ғәлиева үҙенең хеҙмәткәрҙәре менән Иҙел йылғаһының башланған еренә Урал батырҙың ҡылысын яһап ҡуйғандар, батырҙың бишеген эшләп йөрөйбөҙ, тиҙәр. "Шүлгәнташ" мәмерйәһе "Урал батыр эҙҙәре буйлап" тигән маршрут булдырған, Бөрйән районында Морат туғайында эшҡыуар егеттәр туристик база асып, уны "Аҡбуҙат" тип атағандар. Бына шулай бөтәбеҙ ҙә бер урында осраштыҡ та ҡуйҙыҡ. Был йүнәлештә бергәләшеп эшләһәк, уңырбыҙ, тип уйлайым.

Урал федераль округы буйынса Екатеринбург ҡалаһында йыл һайын халыҡ-ара туристик күргәҙмә үтә. Был-

***Мин Силәбе өлкәһенә "Урал батырҙың бишеге" тигән төбәк-ара туристик маршрут эшләйек, тигән тәҡдим менән сыҡҡайным. Алда әйтелгән күргәҙмәлә асыҡланыуынса, "Ирәмәл" тәбиғи паркы етәксеһе Римма Талха ҡыҙы Ғәлиева үҙенең хеҙмәткәрҙәре менән Иҙел йылғаһының башланған еренә Урал батырҙың ҡылысын яһап ҡуйғандар, батырҙың бишеген эшләп йөрөйбөҙ, тиҙәр. "Шүлгәнташ" мәмерйәһе "Урал батыр эҙҙәре буйлап" тигән маршрут булдырған, Бөрйән районында Морат туғайында эшҡыуар егеттәр туристик база асып, уны "Аҡбуҙат" тип атағандар. Бына шулай бөтәбеҙ ҙә бер урында осраштыҡ та ҡуйҙыҡ. Был йүнәлештә бергәләшеп эшләһәк, уңырбыҙ, тип уйлайым.***

***✓ Республикала Нарыҫтау, Әүешкүл кеүек изге урындар ҙа күп, халыҡ уларҙы белә, электән йөрөй ҙә. Киләсәктә был урындарҙы паркка әйләндереү, был эшкә Хөкүмәттең иғтибарын йәлеп итеү ҙә кәрәк буласаҡ.***

# НИГЕҘЕНДӘ... булырға тейеш

тыр унда ҡатнашыусыларҙың ике һүҙенең береһе "Урал" булды. Урал - башҡорт халҡы өсөн иң изге төшөнсәләрҙең береһе. Меңәрләгән ир-егет ғорурлыҡ менән шул исемде йөрөтә, "Урал" халыҡ көйө халҡыбыҙҙың гимнына әүерелгән, "Урал батыр" тип аталған эпосыбыҙ бар, тип иң аҙаҡтан мин сығып һөйләнем. Екатеринбург буйлап экскурсияла йөрөгәндә экскурсовод башҡорттарға бәйле урындарҙы күрһәтеп, ата-бабаларыбыҙҙы телгә ала, уларға бәйле ваҡиғаларҙы һөйләй. Ошо тарихыбыҙҙы, ошондай ҡиммәттәргә эйә булғаныбыҙҙы онота төшәбеҙ шул, шул уҡ Урал батыр исеме менән бәйле тур күптән булырға тейеш ине. Быйыл был күргәҙмәгә ныҡлап әҙерләнеп барҙыҡ. "Урал батыр ере", "Урал батырҙың алтын билбауы" проекттарына "Аманат" студияһының "Урал батыр" анимацион фильмын ҡушып, презентация яһаныҡ. Бик һәйбәт ҡабул иттеләр, Урал округында "Урал батыр" брендын тап беҙҙең - башҡорт милләте вәкилдәренең күтәреп сығыуыбыҙ бик урынлы булды. Башҡа төбәктәргә лә, беҙгә ҡушылығыҙ, ул төбәкара маршрутҡа әйләнһен, тигән тәҡдим яһаныҡ.

Туризмды үҫтереү өсөн Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында махсус комиссия булдырҙыҡ. Бөгөнгө көндә ярты миллион башҡорт ситтә йәшәй, уларҙың 10 проценты ғына Башҡортостанға ялға ҡайтҡанда ошо маршруттар буйлап үтһә, 50 мең тирәһе кеше килеп сыға. Беҙҙе ситтә йәшәүсе яҡташтарыбыҙ менән ҡоролтай үҙәктәре бәйләп тора. Һәр төбәктәге был туристик маршруттарҙың юлын, нисек итеп беҙҙең менән бәйләнергә мөмкинлеген белеп торһондар.

**▶ "Урал батыр билбауы" туристик маршрутының пункттары билдәләнгәнме?**

**К. КҮСКИЛДИН:** Маршрут баш ҡалабыҙ Өфөнән башланасаҡ. Унан Көньяҡ Урал заповеднигынан башланған Ямантауҙа туҡтайбыҙ. Ул шулай уҡ үҙенсәлекле легендалар - дейеүҙәр, аждаһалар менән бәйле урын. Учалы районында - Азия менән Европа сиге, Ахундағы һынташтар, Әүешкүл, "Әүлиә" шишмәһен ҡарап, Иҙел, Урал йылғалары башланған урынға барып етеп була. Унан кире әйләнеп, Әбйәлил районы "Яҡтыгүл" күле аша Башҡортостандың беренсе баш ҡалаһы Темәскә сығабыҙ. Унан һуң Бөрйәнгә, "Шүлгәнташ" мәмерйәһенә, унан Хәйбулла, Йылайыр, Ейәнсура районы аша сәйәхәт итеп, Күгәрсен районында, "Мораҙым" тарлауығында, Үрге Бикҡужалағы "Башҡорт ауылы"нда ял итеп, "Нөгөш" һыуһаҡлағысы, З. Биишева музейы, Бәндәбикә кәшәнәһе аша Ғафури районы Сәйетбаба ауылына - башҡорт милли мәҙәни үҙәгенә һуғылып, Өфөгә ҡайтырға була. Шул уҡ маршрутты Ырымбур, Магнитогорск аша килгәндәр икенсерәк үтеүе ихтимал. Әлегә уның төрлө маршруттары әҙерләнә. Туризм бизнесында барыһын да ентекләп иҫәпләп, туристарға әҙер продукт тәҡдим итергә кәрәк, юғиһә, маршруттан уның исеме генә тороп ҡалыуы ихтимал.

Унан һуң, хәҙер беҙгә республиканы урап сығып, "Урал батыр" эпосы менән бәйле башҡа үҙенсәлекле урындарыбыҙҙы барлап, исемлек төҙөргә кәрәк. Мәҫәлән, ҡайһылыр төбәктә Йәнбикә, Йәнбирҙе тигән йылға бар. Ғөмүмән, туризм бизнесында мифология көслө, булмағанды уйлап табалар ҙа, шуны туристарға тәҡдим итәләр. Сочила Прометей бығаулаған ташты ҡарарға мин дә барҙым бер тапҡыр. Барһаҡ, бер суйырташҡа бығауҙар ҡуйғандар ҙа, шунда, йәнәһе, Прометей бығауланған, тип күрһәтәләр. Урал батыр исеменә иһә бер нәмә лә уйлап сығарып торорға ла түгел, һәр урында уға бәйле хәтирә, риүәйәттәр тулып ята.

Республикала Нарыҫтау, Әүешкүл кеүек изге урындар ҙа күп, халыҡ уларҙы белә, электән йөрөй ҙә. Шундай урындар буйынса реестр төҙөү бик кәрәкле эш. Киләсәктә был урындарҙы паркка әйләндереү, был эшкә Хөкүмәттең иғтибарын йәлеп итеү ҙә кәрәк буласаҡ. Республикала туристик продукт бар ул, уны әҙерләп, бренд яһарға ғына кәрәк.

**▶ Башҡортостан территорияһында ҡышҡы спорт туризмы туристарҙы йыя ала, әлбиттә, ә бындай экскурсия йүнәлешендәге маршруттар ҡышын да эшләйәсәкме?**

**К. КҮСКИЛДИН:** Ҡышын йәй миҙгелендәге кеүек үк ағым булмаҫ, моғайын. Шулай ҙа республикала ҡышын да маршруттар буласаҡ, ҡаргиҙгестәрҙә йөрөргә лә мөмкин.

**Д. ҒӘЙНУЛЛИН:** "Урал батыр ере" туристик маршруты йыл әйләнәһенә эшләйәсәк, музей комплексындағы биналар йылытыласаҡ. Беҙҙең тағы бер маҡсатыбыҙ - туристарҙың ағымын тотороҡландырыу. Иҫәпләүҙәр буйынса, әле "Шүлгәнташ" мәмерйәһенә йәй көнөндә меңдән ашыу кеше килһә, көҙ, яҙ, ҡыш туристар бөтөнләй булмай. Әгәр ҙә музей комплекстары эшләһә, был һан тигеҙләшер ине. Маршрут объекттары төҙөү менән бер рәттән, ғилми эштәр ҙә алып барабыҙ. Рәсәй Фәндәр академияһы геологтары билдәләүенсә, кешенең күпләп инеүенән мәмерйәнең микроклиматы боҙола, яйлап ҡына һүрәттәр юғала бара. Заманында ул һүрәттәр яҡшы һаҡланған, сөнки яйлап ҡына аҡҡан һыу һөҙөмтәһендә улар кальцит менән ҡапланған булған. 60-сы йылдарҙа һүрәттәрҙе тапҡас, уларҙы шул ҡатламдан таҙартҡандар. Хәҙер һыу һәм кеше менән ингән микроорганизмдар тарафынан буяуҙар ашала, хатта ҡайһы бер һүрәттәрҙе көслө компьютер техникаһы аша ғына күреп була. Рәсәйҙә мәмерйәләрҙәге һүрәттәрҙе һаҡлау технологияһы эшләнмәгән, яҡшы белгестәр, фән эшмәкәрҙәрен йыйып, киләсәктә Рәсәй кимәлендә таштағы һүрәттәрҙе һаҡлау буйынса Рәсәй фәнни үҙәген төҙөргә хыялланабыҙ.



***Салауат районында, мәҫәлән, Салауат Юлаевтың исеменә бәйле эшмәкәрлек алып барыла. Салауат Юлаев эҙҙәре буйынса туристик маршрут эшләй. С. Юлаевтың музейы директоры Зилә Садиҡова бик әүҙем эш алып бара, батырҙың тыуған ауылы урынында мавзолей төҙөргә лә ниәттәре бар. "Салауат Юлаев вариҫтары" ассоциацияһы бар, улар Юлай ауылында Салауаттың ағаһы Раҡайҙың ҡәберен тапҡандар. Быйыл махсус рөхсәт алып, археологтар тикшеренеүҙәр үткәрҙе, уның баш һөйәге буйынса Салауаттың ҡиәфәтен тергеҙергә уйлайбыҙ. Ғөмүмән, район етәкселеге туризмға арналған саралар, семинарҙарҙы йыш үткәрә. Баймаҡты музей-заповедник зонаһына әйләндереү һөҙөмтәһендә Ирәндек тауын алтын табыу эшмәкәрлегә менән шөғөлләнеүселәрҙән аралап алып ҡала алдыҡ. Унда әллә күпме археологик ҡомартҡы бар.***

**▶ Илдең, республиканың туристик потенциалы тулыһынса ҡулланылмай ҙа тиерлек, был эштә дәүләттең өлөшө ниндәй кимәлдә булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

**К. КҮСКИЛДИН:** Был өлкәлә донъя кимәлендә тәжрибә шулай: дәүләт туризмға күпме килем ала ала, шул сама ғына һала. Шуға ла дәүләттән генә нимәлер көтөп ултырыу дөрөҫ түгел. Бынан өс йыл элек кенә бер нәмә лә юҡ ине, бөгөн республиканың туризм өлкәһенә ҡағылышлы программалары бар. Унан һуң, быға тиклем Башҡортостанда туризм спорт туризмы йүнәлешендә генә үҫеште. Биш йыл туризм өлкәһендә эшләйем, унан алда БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығында эшләгән тәжрибәм күрһәтеүенсә, бөтөн туризм йылғала кәмәлә ағып төшөүгә, тау башына үрмәләүгә, уҙыштарға ғына ҡайтып ҡала ине. Хәҙер ҡараштар үҙгәрҙе, Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты бар, Башҡортостан Республикаһы Туриндустрия берлеге төҙөлдө, дәүләт кимәлендә ҡабул ителгән был йәмәғәт ойошмаһына быйыл биш йыл була. Ошо ойошма менән туризм өлкәһендә күп эштәр эшләнде. Гәзит сығарабыҙ, портал булдырҙыҡ, күргәҙмәләрҙә ҡатнашабыҙ. Айырым БР Туризм буйынса агентлыҡ булдырылды. Ләкин дәүләт механизмы ул шул тиклем ауыр әйләнә, ҡағыҙҙар араһында йүгереп тик йөрөйһөң. Ә эшҡыуар булып эшләгән кешегә бар нәмәнең тиҙ хәл ителеүе мөһим. Улар менән килешеү алып бара башлаһаң, эш һуҙыла. Шуға ла күберәк үҙебеҙгә эшләргә, аукциондарҙа ҡатнашырға, башҡа төрлө юлдарын эҙләргә кәрәк.

**Д. ҒӘЙНУЛЛИН:** Халҡыбыҙ өсөн изге һаналған төшөнсәләргә ҡағылғанда, һәр беребеҙҙең фиҙаҡәрлеге мөһимерәк. Беҙ әле Урал батырға ҡағылышлы нәмәләр тураһында ғына һөйләшәбеҙ. Шул уҡ Салауат районында, мәҫәлән, Салауат Юлаевтың исеменә бәйле эшмәкәрлек алып барыла. Салауат Юлаев эҙҙәре буйынса туристик маршрут эшләй. С. Юлаевтың музейы директоры Зилә Садиҡова бик әүҙем эш алып бара, батырҙың тыуған ауылы урынында мавзолей төҙөргә лә ниәттәре бар. "Салауат Юлаев вариҫтары" ассоциацияһы бар, улар Юлай ауылында Салауаттың ағаһы Раҡайҙың ҡәберен тапҡандар. Быйыл махсус рөхсәт алып, археологтар тикшеренеүҙәр үткәрҙе, уның баш һөйәге буйынса Салауаттың ҡиәфәтен тергеҙергә уйлайбыҙ. Ғөмүмән, район етәкселеге туризмға арналған саралар, семинарҙарҙы йыш үткәрә. Баймаҡты музей-заповедник зонаһына әйләндереү һөҙөмтәһендә Ирәндек тауын алтын табыу эшмәкәрлеге менән шөғөлләнеүселәрҙән аралап алып ҡала алдыҡ. Унда әллә күпме археологик ҡомартҡы бар. Әле Баймаҡта был музей-заповедниктың музейын төҙөп бөттөк, тиҙҙән ул үҙ ишектәрен асасаҡ. Фәйзулла ауылы эргәһендә башҡорт ауылы төҙөү идеяһы ла бар, ул киләсәктә, бәлки, "Урал батыр билбауы"на инеп китер.

Ә иң яҡын пландарға килгәндә, 12 июлдә Бөрйән районы менән берлектә "Шүлгәнташ" мәмерйәһе эргәһендә "Башҡорт балы - Бөрйән даны" тип аталған халыҡ-ара этнофестиваль үткәрергә йыйынабыҙ. Ул Бөрйән балына арнала, сөнки бөрйәндәрҙең төп шөғөлө - ҡортсолоҡ һәм был ваҡытҡа кешеләр беренсе бал уңышын ала башлай. Бындай фестивалдәр сит илдәрҙә бик популяр, ул ваҡиға туризмы тип атала. Йыйылған халыҡҡа солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән ағайҙар бал тәмләтер, солоҡсолоҡҡа арналған бәйгеләр үткәреү, халыҡ кәсептәрен, йолаларын тергеҙеү менән бер рәттән, районға туристарҙы йәлеп итеү, Бөрйән балына иғтибарҙы арттырыусы сара булырға тейеш ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн йәмғиәттә планетар фекерләү мәҙәниәте алға сыҡҡан заманда йәшәйбеҙ, тиһәк тә, халҡыбыҙ борондан планетар фекерләүгә эйә булған, хатта йәшәүҙең асылын кеше аңына тәбиғәт үҙе һеңдерә килгән. Шулай булмаһа, "Урал батыр" эпосы кеүек мәшһүр әҫәр тыумаҫ та ине, моғайын. Донъяны танып-белеү, яңы ерҙәр күреү, сит йолалар менән танышыу теләге тәүтормош шарттарында уҡ яралған икән, бөгөн беҙ һөйләшкән этнотуризм йүнәлеше, уның тап Урал батыр исеме менән бәйле булыуы үҙе үк ыңғай билдә. Тимәк, донъялағы бөтөн тереклекте мәңге йәшәтеү хаҡына көрәшкән Урал батырҙың гуманлылыҡ идеялары бөгөн дә әһәмиәтен юғалтмаған әле.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

СӘХИФӘНАМӘ

**Был мәғлүмәттәр Мәскәүгә булған эш сәфәренән әйләнеп ҡайтты. Ҡуптән мейем лабиринттары араһында аҙашып йөрөй улар. Уйланырға ла форсат бирмәй, кем менәндер уртаҡлашҡанымды көткән мәғлүмәттәремдә гәзит уҡыусыларға тәҡдим итергә баҙнат итәм. Мәҡәләм, телевидениела режиссер булып эшләүем сәбәпле, хис-тойғоға үтә наҡыҫ тойолор, бәлки. Унда геройҙарымды осратҡанда күҙемә салынған һәр бер осраҡлыҡ һәм осраҡһыҙлыҡтарҙы һүрәтләргә тырышасаҡмын. Ә һығымтаны, уҡыусым, үҙең яһарһың, тип өмөт итәм. Хыял ишеген әҙләүгә арнайым был һүҙ ебен.**

# СИТ ТАРАФТАРҒА...

## бәхет һәм хыял артынан



### Йәшлек - үҙе тәүәккәллек

Көҙгө командировкамдың тәүге көнө. Башҡорттарға хас һуҙылып сәй эсеүемде күргәс, Вәсил ағай Ханнановтың: "Мәскәүгә килгәндә ашауҙы онотоп торалар, бер секундты ла әрәм итергә ярамай", - тиеүе юл-үгр ғазабын тиҙ онотторҙо. Сикһеҙ киң Рәсәйебеҙҙең баш ҡалаһына килгәндә, уның оҫтаханаһына инеп сығырға ғәҙәтләнгәнмен. Йорттоң беренсе ҡатында Мәскәү скульпторы һындарға йән өрһә, Вәсил ағай уның икенсе ҡатында ижад итә. Семәрләп эшләнгән мөһабәт йортҡа ҡасандыр Пушкин үҙе килеп, тамаҡ ялғар булған, тиҙәр. Вәсил ағай стеналарҙы авангард стилендә үҙ ҡулы менән биҙәгән. Байлыҡ һәм муллыҡты символлаштырған һыйыр елене һындары, мөгөҙлө мал һүрәтләнгән картиналар, Ҡөрьәндең тәүге сүрәһе "Әл-Бәҡара" - бөтөн нәмә һыйыр тематикаһында. Рәссам ҡыҙыҡ күреп һөйләгәйне: кемдер уның ижады менән таныш булмаған саҡта уҡ: "Һеҙҙән һөт еҫе килә", - тигән. Ашарға ла онотоп, шиғыр һөйләй-һөйләй картина яҙа ул. Үҙе генә белгән ниндәйҙер аң етмәҫлек донъяла йәшәй Ханнанов, һине лә үҙ артынан эйәртә. Искәндәр улының талпынып-талпынып виолончель уйнаған моңдары ла килеп ҡушылһа, бөтөнләй башҡа, илаһи төҫтәргә мансылған икенсе киңлектәргә элеккәндәй хис итәһең үҙеңде...

Мин рус һынлы сәнғәтенең Ер шарындағы иң ҙур коллекцияларының береһен үҙ күҙем менән күрергә, тип, Третьяков галереяһына ашыҡтым. Ҡәҙерләп тәрәлгән ҡорот, ҡыҙыл эремсек тоҡсайҙарын әләктерергә лә онотманым. Мин уларҙы Лилиәгә тапшырырға тейешмен. Уның менән музейға бергәләшеп сәйәхәт ҡылырға һөйләштек тә инде.

Лилиә М. - Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһы студенты, 23 йәштә. Сәнғәт белгесе һөнәрен үҙләштерә. Башҡорт һылыуҙарыны бик һирәк осрай торған өлгөһө. Сынлатып көлгәндә теҙелеп торған ап-аҡ ваҡ тештәрен күрһәткән алһыу ирене, бәләкәй генә битле, йылтылдап торған тәрән шоколад төҫөндәге ҡуйы сәсле, осҡондары балҡып торған миндаль формаһындағы күҙле - нәзәкәтле, үтә һылыу ҡыҙ. Лилиәнең студент таныҡлығы һәм зачеткаһына ярты хаҡҡа ике билет алып, Третьяков галереяһына үттек. Һәр картина тирәһендә туктай-туктай, юлдашым менән тормош мәгәнәһе хаҡында тәрән фәлсәфә ҡорҙоҡ. Сере менән дә уртаҡлашты Лилиә. Тәүге йылда әлеге уҡыу йортона инә алмаған икән. Әммә юғалып ҡалмаған, бер йыл әҙерләнеп, киләһе йылда көсөн һынап ҡараған. Икенсе барыуында ҙур ҡала баш әйгән нескә ҡыҙға: бөгөн Лилиә белем тәмен тойоп, ҡанатланып уҡып йөрөй. Хатта заманса бейеү, инглиз теле менән шөғөлләнеп, музыка мәктәбендә уҡытып, әҙерәк булһа ла аҡса эшләргә ваҡыт таба. Хыялынды тормошҡа ашырыу бер ҡасан да һуң түгел, тиҙәр. Кавказ халҡының йөторҙай ҡараштарын йыйып, Мәскәүҙең үҙәк урамдары аша шаулап торған болғансыҡ метроға юлландыҡ. Тормош тәмен бөтөн йөрәге-тәне менән һеңдерергә ынтылған, ҡара күҙҙәрендә илаһи осҡондар уйнаған йәш ҡыҙ халыҡ менән шығырым тулы вагонға инеп китте. Әсәһе ебәргән ҡорот моҡсайы ғына күренеп ҡалды. Уны Мәскәүҙең үҙәгендә уранлашҡан консерваторияның дөйөм ятағы көтә.

Эшемә ҡағылышы булмаған тәүге формаль түгел осрашыу ине был. Яҡты нур һибеп, осҡон булып тороп ҡалды хәтерҙә Лилиә. Хатта көнләшеп тә ҡуйҙым йәшлегенә. Йәш саҡта һәр нәмәне башлауы еңел тойола. Әсәйең күстәнәскә ҡорот һалып та ебәрһә, ҡанаттар тағы ла үҫкәндәй. Ә олоғая килә ҡайны бер уйҙарың хыял ғына булып ҡала.

### Теләккә кәртәләр юҡ

"Карамель", "Услышь мое сердце", "Немного не в себе", "Крем" кеүек билдәле сериалдар режиссеры Флүзә Фархшатова - "Профилдәр" тип исемләнгән тапшырыуымдың буласаҡ геройы. Интервью эшләгәндә уны эш мәлендә төшөрөү хаҡында һөйләшеп ҡуйғайным. Ниһайәт, ярты йыл көтөүем, интернет аша уны бимазалауҙарым бушҡа китмәне.

Лубянка майҙаны. Ҡыҙыл кирбестән төҙөлгән ошо боронғо биналарҙың береһендә кино төшөрөлергә тейеш. ПТС - кусмә телевизион станция машиналарын күреп ҡалыу менән операторым менән унан һуҙылып киткән сымдар буйынса юлландыҡ. Улар беҙҙе икенсе ҡатҡа алып менде. Бында аппаратура тағы ла күберәк булып сыҡты. Тирә-яҡта кабелдәргә уралып, костюм, декорация менән ҡапсыҡтар тәгәрәп ята, шау-гөр килеп халыҡ йөгерешә. Ҡайҙандыр яңғыраған "Камера! Мотор!" тиеү менән уларҙың бағыны ла туктап, тын да алмай ҡатып ҡала. Был мауыҡтырғыс мәхшәр араһында Флүзәне күреп ҡалам. Яҡынлашыуы ла ҡурҡыныс, янында гәйепле йөҙ менән торған ҡыҙсыҡ ниндәйҙер хилафлыҡ ҡылған, күрәһең. Әһә, киноға төшөр алдынан кәрәкле ойоҡ әҙерләмәгән икән. Режиссер костюм буйынса рәссамға шелтә яһай була, тимәк. Ул арала Флүзә аптырап тормай, ботинкаларын ситкә ырғытып, үҙенең ойоҡтарын актерға һона, бирелеп уға ролен аңлата башлай. "Режиссерыбыҙ шәп кеше, ҡәтғи, әммә асыулана белмәй", - тип йылмайып, ҡаҙаҡҡа оҡшаған егет беҙгә күҙ ҡыҫып китә.

Фильм төшөрөү майҙансығын үҙ күҙең менән күреү - уникаль мөмкинлек. Ул телевидениенан ҡырҡа айырыла. Режиссер кино төшөрөү барышын мониторҙар аша күҙәтеп, "плейбэкта" - ситтә ултыра. Ҡолаҡсындар һәм рация аша бригадаға команда биреп, эш барышы менән етәкселек итә. Янында ярҙамсыһы дублдәрҙе яҙып, ә тауыш режиссеры тауыш кимәлен тикшереп бара. Бер эпизод төшөрөлөү менән, улар бар аппаратура менән икенсе сәхнәгә күсә. Майҙансыҡтар иртән иртүк әҙерләнә. Минең күҙ алдымда ғына табип кабинеты һәм йоҡо бүлмәһендәге диалогтар төшөрөлдә.

Офис декорацияларына күсеү мәлендә микрофоным менән Флүзә янына ашыҡтым. "Сериал төшөрөү - конвейер һымаҡ икән. Завод эшен хәтерләткән был эштә ижадҡа урын ҡаламы?" - режиссерға баянан бирле борсоған һорауымды бирәм. "Ысынлап та, ҡәтғи график буйынса эшләйбеҙ, көнөнә билдәле бер план үтәйбеҙ. Әммә ижадһыҙ мөмкин түгел. Киноның һәр кадрын алдан уҡ ҡағыҙға төшөрәһең. Режиссер - монитор ҡаршыһына ултырғанда, оператор - камера артына баҫҡанда нимәне һәм нисек төшөрәсәген алдан белә", - ти Флүзә. Тормоштоң әлеге этабында Флүзә өсөн сериал төшөрөү - тик аҡса эшләү генә. Ул киләсәктә ҙур экрандарға сығыр тәрән мәғәнәле фильм эшләү тураһында хыяллана. Башҡорт киноһы тураһында айырыуса әсенеп һөйләне ул. "Өфөмә ҡайтып ижад итер инем", - тиеүе аптырата төштө. Халҡы, уның киләсәге Мәскәүҙең ҡайнап торған тормошона ҡарағанда Флүзәне нығыраҡ борсой. Биҙәнеп, кейемдәрен алмаштырып, гримерканан актриса килеп сыҡты. Миңә бүленгән ун биш минут үтеп китте, тигән һүҙ. Яңынан "Камера! Мотор!" командалары ишетелә башланы. Операторым менән аяҡ осона баҫып ҡына сығып китәбеҙ.

Электрон йә ҡағыҙ китаптарға, гәзит-журналдарға тексәйгән, таушалған һоро кейемдәргә төрөнгән гәмһеҙ йөҙҙәргә ҡарап, метроның ҡолаҡ ярғыс тауышына битемде сирып, вагонда китеп барам. Уйҙарымда - Флүзә. Көн дә иртән һәм кисен ике сәғәт гүмерен ошо вагонда һеләкенеп үткәрә ул. Бөтөн мәскәүҙәр ише, йә сценарийҙы уҡып, йә буласаҡ киноны башында ҡат-ҡат әйләндереп баралыр. Ошондай тормошта йәшәр өсөн ул ике йыл рәттән ВГИК-ка ҡабул итеү имтихандарына килә, билдәле Рәсәй режиссерҙарының ассистенты булып эшләй. Эйе, белем дә, бөйөклөк тә еңел бирелмәй. Әйткәндәй, Мәскәүгә йәш ҡыҙсыҡ булып килмәй Флүзә. Рәссам белеме булған, Рияз Исхаҡов менән клиптар сығарып өлгөргән тәжрибәле режиссер булып килә. Тимәк, нисә йәштә булыуың мөһим түгел, күрәһең, теләгеңдең ни тиклем көслө булыуы мөһим... "Киләһе туҡталыш-"Охотный ряд" - дикторҙың ягымлы тауышы ишетелә. Был туҡталышта тағы бер Лилиә менән осрашырға һүҙ ҡуйышҡанмын...

### Үҙеңде тап - бәхет һине табыр

"Бриош" француз ҡүмәсе янына, осһоҙораҡ булһын, тип, эсергә 35 һумға йылы һөт алдым. 140 һумлыҡ уҫҡа һыймалы шоколад, ҡуйыртылған һөт менән буялған, ауыҙҙа ирер торор татлы йомроҡасты әкрен генә ашай-ашай, Лилиә менән өҫтәл артында ултырабыҙ. Мәскәүҙә һәр ерҙә wi-fi бар. Планшеттаң булһа, интернетһыҙ ҡалмаясаҡһың. Мәскәүҙә күп мәсьәлә интернет аша хәл ителә. Эш табам, тиһәң дә, тәүҙә электрон резюмеңды ебәрергә кәрәк. Әлбиттә, танышлыҡ аша урынлашыу булмаған урын юҡтыр, әммә резюме төшөнсәһе был ҙур ҡалала күҙ буяу өсөн генә түгел.

- Метрола китеп барғанда шылтыраттылар: "Маяковская" станцияһына килә алаһығыҙмы?" Нимә яуапларға белмәй торған арала дикторҙың "Киләһе станция -"Маяковская" тигәнен ишетеп, "Эйе!" тип әйтеүемде һиҙмәй ҙә ҡалам. Ике сәғәттән Мәскәү банктарының береһендә эш контрактына ҡултамға ҡуйып ултыра инем. Бөрөлә эшләгәндә күп тәжрибә туплағандай, банк системаһының бар үҙенсәлектәрен төшөнгәндәй тоя инем. Бәхеткә түҙеп ҡара, тиеүҙәре дөрөҫ икән. Тик торғанда, 32 йәш тула тигәндә, Мәскәүгә сығып китеп, яңы тормош башларға булдым, - тип үҙенең тарихын һөйләй Лилиә. Ябай ғына итеп кейенгән, сәсен йыйған, биҙәнмәгән, ихлас йылмайғанда күҙҙәре тирәһендә ҡояш нурҙары шикелле һырҙар һуҙылып китә. Ысынын әйткәндә, ҡаршымда ултырған был ҡыҙҙы абруйлы банк хеҙмәткәре тимәҫһең дә.

- Мәскәү өлкәһенә ҡараған Подольск ҡалаһында бүлмә таптым, - ти Лилиә. - Эш урынымдан алыҫ. Иртәнге 9-ҙа эштә ултырыр өсөн иң тәүге 6-лағы электричкала, унан 40 минут тирәһе метрола килергә тура килә ине. Йәшәгән бүлмәм - буп-буш. Тын менән тултырылған матрас һатып алдым. Интернет ҡиммәт: нетбугымдан көн дә бер үк фильм ҡарап, ҡай саҡ артыҡ арыуҙан ашамайынса ла йоҡларға ята инем. Йәшәү шарттарына ҡул ғына һелтәр инем, күрәһеләрем алда булған икән. Мәскәү халҡы башҡорт халҡы түгел: алдашырға ғына торалар. Банктың кредит бүлексәһендәмен, алдаҡсыларҙың ниндәйе менән эш итергә тура килмәй. Бөрөлә эшләгән сағымда һәр клиентым менән танышып, дуҫлашып бөткәйнем. Бында һине нисек мыҫҡыл итергә белмәй аҙапланалар, - тип әсенә ҡыҙ.

Мәскәүгә китергәме-юҡмы, тип аптырап йөрөгәндә, күрәҙәсегә лә барып килә Лилиә. Ул ҡатындың "ярты йыл түҙһәң, унырһың" тигәненә ышанып, ҙур ҡалаға сығып китә. Яңы тормош башлауына әле ни бары дүрт ай. "Тағы ике ай теш ҡысырға", тип күҙҙәре тирәһендәге ҡояш һыр-нурҙарын уйнатып, йылмая үҙе.

Мине һаман да, хыял өсөн йәш ҡаршылыҡ була аламы, тигән һорау борсой. Лилиә бит аптырап тормаған, нисек кенә булмаһын, өсөнсө тиҫтәһен ваҡлағанда тормошон ҡырҡа үҙгәртергә булған. Ә Мәскәү тураһында хыялланды микән ул берәй ҡасан? Әллә яңғыҙлыҡ үҙгенә үттеме икән? Ҙур ҡала яулауы бәхет түгел, ул ҡалала үҙеңде, тормош мәғәнәһен, икенсе яртыңды табыу - бына бәхеттәр ул. Нисек кенә булмаһын, тормош мәғәнәһе - нәҫел ҡалдырыуҙа, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ өсөн. Ялтыр машинанан төшөп, ялтыр ресторанда ялтыр кейемдәрҙә яңғыҙлыҡтан ҡалтырап ултырыр өсөн килмәгәндер бит Лилиә Мәскәүгә...

**Гөлназ ҒӘЛИМУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ЕҢЕҮСЕҺЕ ҠАЙҘАН?

## Башҡортостандан!

**Өфөлә XVII "Урал моңо - 2014" халыҡ-ара төрки йәштәренең музыкаль ижады конкурс-фестивале тамамланды. РФ Мәҙәниәт министрлығы ярҙамы һәм "Рәсәй мәҙәниәте" федераль маҡсатлы программаһы сиктәрендә БР Мәғариф министрлығы, "Башҡортостан" дәүләт теле-радио компанияһы, Республика халыҡ ижады үҙәге тарафынан уҙғарылған был мәртәбәле сара төрки донъяһында башҡорт музыкаль мәҙәниәтенең үҙ урыны барлығын тағы бер тапҡыр раҫланы.**



Нимә генә тимә, бөгөнгө заманда барған глобаль процестар айырым халыҡтарҙың мәҙәниәтендә һәм сәнғәтендә сағылыш тапмай ҡалмайҙыр, күрәһең. Быны бәйгелә ҡатнашыусыларҙың ижадында йылдан-йыл халыҡсанлыҡ төшөнсәһенең һиҙелерлек кәмей барыуынан да тойорға була. Һәр ваҡыттағыса, милли костюмдарҙа, үҙ телдәрендә сығыш яһаһалар ҙа, күп бәйгеселәрҙең сығышына тап шул халыҡсанлыҡ етешмәне кеүек. Миллилек - тышҡы атрибуттарҙа ғына түгел шул, ул күңелеңдә йөрөткән рухта, милли моң-йырында, милли асылыңда. Был йәһәттән Башҡортостан данын яҡлаусы башҡарыусыларҙың бер башҡа юғары булыуы ҡыуандырҙы шулай ҙа, тимәк, үҙ мәҙәниәтебеҙҙе, үҙ йөҙөбөҙҙө һаҡлай алабыҙ әле. Бәйгенең Гран-приһын яулаусы Марсель Ҡотоевҡа етеүселәр булмаһа ла, Рөстәм Шаһыбалов, Зилиә Бәхтиева, Салауат Мөхәмәтйәров, Артур Шөғәйепов та еңеүсе исеменә лайыҡ булырҙай талантлы йырсылар. Ниһайәт, бер нисә йылға һуҙылған тынлыҡтан һуң, Башҡортостан "Урал моңо"на быйыл лайыҡлы бәйгеселәр тәҡдим итә алды. Тик "Булғанда - бүреләй, булмағанда - сүреләй" кеүегерәк килеп сыҡты. Әле һанап үтелгән йырсыларҙың һәр береһе халыҡ-ара конкурстарҙың иң юғары баһаһына лайыҡ булырлыҡтар. Шуға ла уларҙың был конкурсҡа бер юлы сығыуы бер аҙ аптыратты. Дөйөм бәйгенән тыш, яҡташтарыбыҙға иң яҡшылар исеменә үҙ-ара ла ярышырға тура киләсәген һайлап алыу турын үткәреүселәр яҡшы аңлағандыр бит. Ғөмүмән, беҙгә бындай юғары конкурстарға йырсыларҙы алдан әҙерләү эшмәкәрлеге етешмәй. Баһалама ағзаларының һәр береһе иһә уларҙың талантына һоҡланыуын белдереп, был сығыштарҙың республикала заманса милли мәҙәниәттең юғары кимәле тураһында һөйләүен белдерҙе. Хәҙерге заман музыкаһында ниндәй генә йүнәлештәр булмаһын, халыҡ йыры, халыҡ көйө, хатта заманса аранжировкала булһа ла, һәр ваҡыт үтемле булыуына тағы бер дәлил был. Үҙебеҙ был байлыҡҡа иғтибар итеп етмәһәк тә, ситтәр "экспериментала этника" тип атап, өҙләүҙе, ҡумыҙ кеүек музыка ҡоралдарыбыҙҙы ҡулланыуҙан һис тартынмай.

Кимәл тигәндәй, ҡасандыр башҡорт эстрадаһы һәм рок-музыкаһы республика фестивале булараҡ, Башҡорт йәштәре иттифағы, "Йәшлек" гәзите тарафынан ойоштороло башлаған "Урал моңо" бәйгеһенең хәҙер халыҡ-ара статусы ла, үҫеү, камиллашыу өсөн мөмкинлектәре лә бар. Әммә үткән һуңғы ике бәйгенең кимәленә ҡараһаҡ, үкенескә күрә, бының киреһен күрәбеҙ. Баһалама ағзаһы, Хакасияның халыҡ артисы Герман Танбаев та фестивалдең үҙ маҡсатынан бер аҙ тайпылып, көрсөккә терәлә башлауы тураһында әйтте: "Был минең шәхси фекерем, әммә һәр фестиваль үҙенең тарихында бындай этапты үтергә һәм башта ҡуйылған маҡсаттарҙы яңынан ҡарап, тейешенсә һығымталар яһарға тейеш. Йәштәр ижады тип атала икән, бәйгелә тап йәштәр мәҙәниәтенә, йәштәр субкультураһына бәйле тауыштарҙы ишетергә теләр инем, ә ундайҙар әлегә аҙсылыҡты тәшкил итә. Беҙ көслө тауыштарҙы айырып билдәләйбеҙ ул, шулай ҙа ижади ҡарашлы йәштәрҙе иғтибарһыҙ ҡалдырабыҙ. Етмәһә, глобаллашеү халыҡтарҙы ла, уларҙың милли мәҙәниәтен дә йота бара. Шуға ла беҙгә милли музыкаль байлығыбыҙҙы донъя мәҙәниәтенә сығарыу өҫтөндә эшләргә, ниндәйҙер мөхиткә яраҡлашҡан хәлдә лә, унда үҙ халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен индерергә бурыслыбыҙ. Талантлы йырсы донъяға халҡын таныта һәм күрһәтә алырлыҡ булырға тейеш. Дөйөм алғанда, төрки донъяһында был абруйлы фестиваль йәшәргә тейеш, быйылғы бәйге уға һулыш өҫтәренә өмөт итәм".

"Урал моңо" конкурс-фестиваленең тағы бер изге маҡсаты - төрки халыҡтарын берләштереү, улар араһында дуҫлыҡ күперҙәрен нығытыу. Яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән, Рәсәй төбәктәренән килгән 53 бәйгесе өсөн дә, ойоштороусылар өсөн дә, бәлки, быныһы мөһимерәк булғандыр ҙа. Айырым дәүләт булып йәшәп, телдәребеҙ айырылып торһа ла, беҙ бер тамырлы, туғандаш халыҡтар. Беҙҙең шатлыҡтарыбыҙ ҙа, хәл итәһе мәсьәләләребеҙ ҙә уртаҡ. Ошоларҙы иҫәпкә алғанда, быйылғы конкурстың төп үҙенсәлеге итеп иҫәпләнгән асыҡ һауалағы концерттағы етешһеҙлектәр ҙә, сит ил ҡунаҡтары сәхнәгә сығып, башҡортса иҫәнләшеп торғанда, алып барыусыларҙың фестивалдең атамаһын да башҡортса матур итеп әйтә алмауы, урынһыҙ шаяртыуҙары бөтөнләй әһәмиәтен юғалта кеүек. Шулай ҙа йәшлек, талант һәм дуҫлыҡ байрамының йөҙөнә тап төшмәһен өсөн бәләкәй генә етешһеҙлектәрҙе ваҡытлыны күреп, дөрөҫ йүнәлеш алһаҡ ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Урал моңо - 2014" халыҡ-ара төрки йәштәренең музыкаль ижады конкурс-фестивалендә 1-се урынға Ҡырғыҙстандан Курал Чокоев менән Ҡырымдан Гүзәл Моратова; 2-се урынға Ҡырғыҙстандан Айбек Саралаев менән Тыва Республикаһынан Аржаана Куулар; 3-сө урынға Әзербайжандан Улькер Алиева менән Башҡортостандан Зилиә Бәхтиева лайыҡ булды. Махсус приз - Ислам Сатыров (Ставрополь крайы) менән Айдаш Барынмааға (Тыва), Абай Әмирханов исемендәге диплом Мерген Тельденовҡа (Алтай), "Төрки традицион сәнғәтен популярлаштырғаны өсөн" дипломы Тюргэн Камға (Силәбе өлкәһе), "Традицияларға тоғролоҡ өсөн" дипломы Людмила Тукан (Молдова) менән Алимжан Абдуллаевҡа (Ҡаҙағстан) тапшырылды.**

**Дилбәр ХӘКИМОВА.**








### *ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Курал Чокоев, Ҡырғыҙстан:** "Урал моңо" бәйгеһендә ҡатнашып, бөгөнгө төрки телле халыҡтарҙың мәҙәниәте, йәшәйеше менән таныша алыуыма шатмын. Өфө ҡалаһының таҙа, төҙөк булыуы оҡшаны, иң мөһиме, беҙ башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевтың һәйкәлен күрҙек. Шундай нескә итеп эшләнгән һәйкәлдә тәүгә осратам, был мөһабәт һынға ҡарап, Салауатты тулыһынса күҙ алдына килтерергә була. Ҡырғыҙ милләтен берләштереүсе Манасты беҙ бөгөн дә телдән төшөрмәйбеҙ икән, башҡорт өсөн Салауат та шулай ҡәҙерле, ахыры.

Телдәребеҙҙең уртаҡлығын ғына түгел, холоҡтарыбыҙҙың бер үк икәнен тойоп йөрөйөм. Бынан күп быуаттар элек формалашҡан әхлаҡи-рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлай алғанбыҙ. Мәҫәлән, конкурста халыҡ йырын башҡарҙым, ул йәйләүҙәребеҙ, тауҙарыбыҙ, ерҙәребеҙгә дан йырлауға, әммә шул уҡ ваҡытта һөйгән ҡыҙына яратыуынды белдереүгә бағышланған. Ереңә, һыуыңа мөхәббәтеңде ҡыҫҡырып әйтә алһаң да, гүзәл заттарға ҡарата һөйөү тойғоһо бер ҡасан да асыҡтан-асыҡ белдерелмәгән. Шулай ҙа башҡорт йырҙарының һағышлыраҡ икәнен аңланым, уларҙың ниндәйҙер бер эске йөкмәткеһе йөрәктәрҙе бөгөн дә тетрәндерер көскә эйә.

**Мерген Тельденов, Алтай:** Мин Улаган районында, теленгиттар йәшәгән төбәктә тыуғанмын, беҙ алтай теленең теленгит диалектында һөйләшәбеҙ. Этнорок, фольк йүнәлешендә күберәк эшләйем, топшуур, ҡумыҙ, икили тип аталған халыҡ музыка ҡоралдарында уйнайым, "Теленгит" тип аталған этно-рок төркөмөн етәкләйем. Бындай эстрада конкурсында беренсе тапҡыр ҡатнашам. Этник музыка бөтөн донъяла ҙур ихласлыҡ менән ҡабул ителә. Бөгөнгө заманда донъя музыкаһында һәр халыҡ үҙенең тауышын ишеттерергә теләй, ә быға тап этник йүнәлеште үҫтереү булышлыҡ итә. Ғөмүмән, төрки донъяһы музыкаһы дөрөҫ йүнәлештә үҫешә тип уйлайым, ҡайҙа ғына барһаҡ та - Австралияла ла, Японияла ла, Америкала ла үҙебеҙҙең фекерҙәштәрҙе осратабыҙ. Иң ҡыуаныслыһы, был йүнәлеш йәштәрҙе йәлеп итә, шуға әүҙем үҫешә лә. Башҡортостанда халыҡ музыка ҡоралдарында һәр егет уйнай белә, өҙләү ҙә бик популяр икән, быға тиклем башҡорт донъяһын ишетеп кенә белһәм, хәҙер үҙем өсөн күп мәғлүмәт тупланым. Беҙ - һеҙҙе, һеҙ беҙҙе нимәгәләр өйрәтһәгеҙ, үҙ-ара тәжрибә уртаҡлашып, артабан халҡыбыҙҙың музыка сәнғәтен үҫтереү өсөн ҡулланһаҡ, "Урал моңо" үҙенең маҡсатына өлгәште, тип иҫәпләргә була.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠУРҠЫУҘАН...

## дарыу бар, тиҙәр

■ Фин ғалимдары бер үк хис-тойғоноң күп һәм төрлө кешенең тәнендә бер үк төрлө физик тойомлауҙар тыуҙырыуын асыҡлаған һәм шуның һөҙөмтәләре буйынса тойғолар картаһын төҙөгән. Бынан элегерәк көнсыгыш һәм көнбайыш мәҙәниәтендә гел генә телгә алынып килгән был фаразды Аалто университеты ғалимдары иҫбатланы. Улар кеше хистәренең аҡыл өлкәһендә генә йәшәмәүен, ә уның биологик нигеҙе лә булыуын асыҡланы. Кеше тәнендә эмоциялар картаһын төҙөү өсөн барған тикшеренеүҙәрҙә Финляндия, Швеция һәм Тайвандән 700-ләп кеше ҡатнашты. Тәжрибә үтеүселәрҙә төрлө хис-тойғолар уятып, ғалимдар уларҙың ниндәй тән өлөштәрендә ниндәйерәк үҙгәрештәр (киңәйеү, йомшарыу, бәләкәйләнеү) кисереүҙәрен теркәп барырға ҡушты. Тәндең теге йәки был өлөшөндә аңлы эшләнелгән үҙгәрештәр киләсәктә кешегә шуға ярашлы хис-тойғо тыуҙырырға булышлыҡ итәсәк, мәсәлән, бәхет тойғоһо, тип аңлатма бирә быға ғалимдар.

■ Белоруссияның Милли академияһы белгестәре "курҡыуҙан дарыу" уйлап сығарыу буйынса эш алып бара. Улар танау ҡыуышлығындағы лайлалы тиресәгә таһҫир итеп, кешенең холоҡ-ғәмәлдәрен үҙгәртеп булыуын фаразларға тырыша. Тәжрибәләр барышында ғалимдар танау ҡыуышлығының лайлалы тиресәһенә кешенең аш һеңдереү трактында йәшәүсе эсәк таяҡсалары фрагменттарын ебәреп, иммун системаһын әүҙемләштереү мөмкинлеген ҡарай.

■ Уппсала (Швейцария) университеты ғалимдары осраҡлы рәүештә ошоға тиклем булыуы мөмкин түгел тип иҫәпләнгән материалды килтереп сығарыуға өлгәшкән. Уға Упсалит тигән атама бирелгән. Инновация магний карбонаты модификацияһынан ғибәрәт һәм ул масса берәмегенә яҫылыҡ майҙаны буйынса донъя рекордсмены булып тора. Упсалит шулай уҡ адсорбция, йәғни һыу йәки химик берләшмәләрҙе үҙенә һеңдереү буйынса ла абсолют рекордсмен.

■ Биология буйынса алдынғы баҫмаларҙан иҫәпләнеүсе "PLoS ONE"журналында яҙылыуынса, Ноттингем университеты ғалимдары тарафынан генетик мутация шифрының сиселеүе һөҙөмтәһендә ҡайһы бер тоҡомло тауыҡтар зәңгәр төҫтәге йоморҡҡалар һала башлаясаҡ икән. Өйрәнелгән аҡ һәм һоро йоморҡҡаларға ҡарағанда зәңгәрҙәре айырыуса нәзәкәтле тәме менән гурмандар өсөн бына тигән үтемле ризыҡ буласаҡ, тип көтөлә.

■ Нигерияла йәшәүсе үсмер үҙенсәлекле һиуыткыс эшләп, ROLEX AWARDS for Enterprise конкурсында еңеп сыҡҡан. Был уйлап сығарыу бер ниндәй етештереү сығымдары талап итмәй. Ул ни бары ҙур балсыҡ көршәк эсенә бәләкәйерәген ултыртып, улар араһығын дымлы ҡом менән тултырыуҙан ғибәрәт. Дым быуға әйләнгәндә, эстәге көршәк һыуына һәм уның эсендәге аҙыҡ-түлек бик оҙаҡ боҙолмай һаҡлана. Мәсәлән, ҡәҙимге помидорҙарҙың ҡәҙимге һиуыткыста нисә көн һаҡланыуын үҙегеҙ ҙә яҡшы беләһегеҙ, ә бына әлеге көршәктәрҙә уларға айға яҡын, йәғни 21 көн буйы ятһа ла бер ни ҙә булмай.

ҠЫҘЫҠЛЫ ҠОР

# АМЕРИКА СТУДЕНТЫ...

## башҡорт бал ҡорттарын өйрәнә

**Ҡурсаулыҡҡа Американан бер студент килгән, уны барып күрә һал, бөгөн-иртәгә ҡайтырға тейеш, тигән хәбәр алғас, тиҙ генә йыйынып, юлға сыҡтым. Мин барып еткәндә студент тамаҡ туйҙырыу менән мәшғүл ине. Тупһала ултырып алған да, беҙҙең ҡыҙҙар бешергән бутҡаны йыпыра ғына. Мин тыныс ҡына уның ашағанын көтөп-күҙәтеп торам. Былай ашауға таҙа күренә "капиталист". Тирмәне һөйбәт тартҡанға оҡшай. Аслыҡ бер туған апай түгел (урыҫса шәп белгән кешеләй, голод не тётка, тигәндә башҡортсаға ауҙарам инде). Ошо ерҙә, нишләптер, үҙебеҙҙең халыҡтың мәҡәлдәре лә телгә килә: ас ҡарынға һөйләшеп булмай, астың асыуы яман, астан ҡаҙан аҫтырма, ашаған малда өмөт бар. Уларҙы эстән генә ҡабатлап, Америка студентының ашағанын сабыр ғына күҙәтәм.**

Ниһайәт, студент һөйләшерлек булды, буғай. Ана бит, миңә ҡарап ҡалай матур итеп йылмайып ултыра. Бына хәҙер һүҙ башларға ла була. Тәүҙә үҙе менән танышайыҡ. Диллон исемле егет икән. Уға әле егерме өс йәш. Өсөнсө курста белем ала. Өйләнмәгән. Атаәсәһе бар. Ғаиләлә дүрт бала - ағаһы, апаһы һәм һылыуы бар. Үҙе әйтмешләй, оло сәйәсәттән алыҫ торған ҡәҙимге ябай ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫкән ул.



Беҙҙең яҡтарға нисек килеп сыҡты икән - был, әлбиттә, төп һорау булды.

- Беҙҙең илдә бер фирма бар. Ул йыл һайын конкурс үткәрә һәм ҡырҡ йәш кешене һайлап ала. Баштан уҡ әйтергә кәрәк, был конкурста еңеп сығыуы еңелдән түгел. Барлыҡ сығымдарҙы ошо фирма ҡаплай, әммә буштан ғына аҡса түгә һалып та бармай. Шуға күрә тырышырға тура килә инде. Төп ҡағиҙә шунан ғибәрәт: һәр кем өйрәнеү-тикшеренеү йүнәлешен үҙе һайлай, әммә был йүнәлеш барлыҡ (йәки күпселек) илдәргә ҡағылышлы булырға тейеш. Бына мин бал ҡортон өйрәнеү юлын һайланым.



Ә башҡалар ниндәй йүнәлеш һайланы икән, был турала ла һорамайынса булдыра алманым.



- Әйтәйек, берәүҙең велосипедҡа ҡағылышлы тикшеренеүҙәрен хупланылар. Хәҙер бит барлыҡ илдәрҙә лә машиналар күбәйҙе. Хатта уның күплеге кешегә ҡамасаулай башланы. Машиналар теҙмәһенән торған тығындар ҡайһы ваҡыт хатта унар саҡрымға һуҙылып китә. Шуға күрә күп илдәрҙә кешеләр велосипедҡа күсергә мәжбүр. Бына ошо теманы өйрәнергә ниәт итте йәш кеше. Илдә ябай халыҡ ниндәй велосипедҡа өҫтөнлөк бирә, өйҙән алып эшкә хәтлем ниндәй ара һәм унда ниндәй велосипед менән йөрөү отошло тип иҫәпләнә, эш урынына барып еткәс, уны ҡуйырға махсус урындар бармы, урлау осраҡтары күҙәтеләме, ғаиләлә һәр береһенең велигы бармы - ошоға оҡшаш һорауҙарҙы ул егет асыҡларға тейеш була инде. Ә бына икенсе бер егеттең темаһы кредит буйынса булды. Кем ниндәй банктан күпме кредит ала, проценты күпме, ул аҡсаны нимәгә тотона, кеше банкты үҙе табамы, әллә банк үҙе тәҡдим итәме, ябай халыҡ кредитты һәр ваҡыт аламы, әллә алған эш хаҡына риза булып көн итәме, кеше кредитты сараһыҙҙан алырға мәжбүрме, әллә артыҡ кәрәк булмаған осраҡта ла аламы (әйтәйек, сит илгә сығып ял итеп килеү өсөн) һәм башҡа ошондай һорауҙарҙы асыҡларға ниәтләй был йәш кеше. Ә бына мин урындағы халыҡтың бал ҡортона ниндәй ҡарашта булыуын асыҡлап ҡайтырға тейешмен. Минең проект артыҡ ҡыҙыҡтыршылыҡһыҙ үтте, тип әйтә алам. Сәбәбе ябай. Бөгөн дөйөм алғанда күп илдәрҙә бал ҡорто күп үлә. Бигерәк тә беҙҙең Америкала күпләп ҡырыла улар. Ҡайһы бер штаттарҙа һәләкәт кимәле 80-90 процентҡа барып етә!

Ошо өйрәнеү-тикшеренеүҙәрҙең төп шарты - барлыҡ мәғлүмәттәрҙе ябай халыҡтан йыйырға тейешһең. Рәсми сығанаҡтарға таяныу бөтөнләйе менән тыйыла. Ҡағыҙға нимә тип яҙһаң да түҙә бит ул. Шуға күрә беҙ бары тик ябай халыҡ менән генә аралашырға, уларҙың көнкүреш шарттарына түҙеп йәшәргә, уларҙың һөйләгәндәренә генә таянып һығымта яһарға тейешбеҙ.

Өйрәнеү йүнәлештәре асыҡланды, буғай. Һысынлап та, конкурстың был шарты бик үҙенсәлекле икән. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, тормошта күп осраҡта ҡағыҙға яҙылған менән ысынбарлыҡ тура килмәй ҙә ҡуя шул. Шул арала Диллон конкурстың өсөнсө шарты менән таныштыра.

- Ошо өйрәнеүҙәр бер йыл дауамында барырға тейеш. Бына мин былтыр июль айында сығып киттем, быйыл август башында ҡайтырға тейешмен.

Ошо урында мин уйлана төштөм. Быны күптәр үтәй алыр ине микән, был бик сетерекле мәсьәлә, буғай. Әйтәйек, бына гәзит уҡыусыларҙың кемеһе бер йыл буйына (!) яңғыҙы ғына һигеҙ-ун илдә булып, унда нимәләр тикшереп ҡайтырға риза булыр ине микән? Белмәйем, әйтеүе бик ҡыйын.

- Ошо бер йыл эсендә мин күп илдәрҙә булырға тейешмен. Бына минең маршрут ошолай - Мысыр, Танзания, Монголия, Һиндостан, Ҡытай, Рәсәй, Англия, Украина, Франция, Италия. Өс ай һайын фирмаға интернет аша ҡыҫҡаса мәғлүмәт ебәреп торам. Ҡайтҡас, әлбиттә, тулы отчет бирәсәкмен.

Һорауҙарҙы байтаҡ бирҙем Америка студентына. Миҫал өсөн кейем, ашауэсеү мәсьәләләре тураһында әңгәмәләшкәндә ҡыҫҡаса яҙып үтәйем.

- Кейем артыҡ ҡыйынлыҡ тыуҙырманы былай. Илдә нимә кейәләр, шуны һатып алаһың да кейәһең дә йөрөйһөң. Ә бына ашау сетерекле нәмә булып сыҡты. Күп илдәрҙә йөрөгәс, ҡыҙыҡ хәлдәргә лә тарып бөтөлдө. Ҡайһы ваҡыт шундай ашамлыҡ килтереп ултырталар, ҡайһы еренән тотоп нимәһен ашарға ла белмәйһең. Ҡалаҡ тотоп алаһың да ултыраһың инде нимәнән башларға белмәй. Ярай әле ҡалаҡ бирһәләр, ә бирмәһәләр...

Бына ошолай килеп юлыҡҡан икән Бөрйән ерена Америка студенты. Әйтергә кәрәк, күп илдәрҙә умартасылар менән осрашҡан Диллон. Бал ҡортона ҡағылышлы мәғлүмәт туплаған. Гәзит биттәрендә бөтәһе тураһында ла яҙып булмаҫ, ахыры. Шулай ҙа бер нисәүһенә туҡталып китәйек әле. Бына Англияла, ерҙә урын етмәү сәбәпле, бал ҡорттарын күп осраҡта өй баштарында тоталар **(фото)**. Танзанияла балды бороп алып тормайҙар, ә балауыҙы менән ҡуша ашайҙар **(фото)**. Миңә иң оҡшағаны тауҙарҙа йәшәгән Һиндостан умартасылары булды. Улар өй һалғанда стенала бушлыҡтар ҡалдырып төҙөйҙәр, ә өйҙөң эс яғынан уны тимер ябыу менән ябып ҡуялар (беҙҙеңсә, мейес ауыҙын япҡан һымаҡ була инде). Бер өйҙә сама менән 6-8 ҡыуышлыҡ ҡалдырыла. Ҡыҫ айырыу осоронда ошо бушлыҡтарға бал ҡорттары килеп ҡуна. Балауыҙ һуҙып, бал йыйып, имен-аман йәшәп алып китәләр икән. Уларға ла шәп, кешегә лә уңайлы. Сәй эсергә бал кәрәк икән, ябыуҙы асаһың да балды ҡырҡып та алаһың **(фото)**. Бал ҡорттары ошо ояларҙа ҡышлайҙар, дөрөҫөрәге, ямғыр осорон үткәрәләр. Беҙҙә ҡыш осоронда ҡар булһа, Һиндостанда ярты йыл буйына (!) туктамай ямғыр яуа икән.

Ә төп һығымта ниндәй икән? Был һорауға Диллон ошондай аңлатма бирҙе.

- Барлыҡ илдәрҙә лә ябай халыҡ тыныс һәм күңелле итеп йәшәргә тырыша. Бәләкәй генә ҡыуанысты ла оло шатлыҡ күреп ҡабул итергә өйрәнгән улар. Күңел тынслығы һаҡланған уларҙа. Ә инде бал ҡортона килгәндә, ябай умартасылар ата-бабаларҙан ҡалған эш ҡорамалдарын һаҡлап, урындағы бал ҡорто менән эшләүҙе хуп күрә. Был шөғөлдән бөтмәҫ-төкәнмәҫ килем алыу мәсьәләһе уларҙы артыҡ борсомай.

Был һүҙҙәргә өҫтәп, тағы ни әйтәһең инде?

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# НУХ БӘЙҒӘМБӘР ҺӘМ ТУФАН

**Мөбәрәк рәжәб айы тамамланып, шәғбән айы башланды. Кешелек донъяһы тарихында рәжәб айында ике оло ваҡиға теркәлеүе билдәле. Шуның беренсеһе - донъяны туфан һыуы баҫыуы тураһында бер аҙ мәғлүмәт биреп үтәйем әле.**

Аллаһы Тәғәлә Ислам динен таратыу өсөн донъяға, халыҡ араһына бик күп бәйғәмбәрҙәр ебәрә. Дәрмәшил батша ҡәүеменә Нух бәйғәмбәр тәғәйенләнә. Дәрмәшилдең ҡәүемендә иҫерткес эсемлектәр менән мауығып, төрлө боҙоҡлоҡтар ҡылып, таштан, ағастан эшләнгән поттарға табынып йәшәгән кешеләр күп була. Нух (ғ.с.м.) был ҡәүемдә 500 йылға яҡын Ислам диненә өндәй. Ләкин халыҡ бәйғәмбәрҙе ҡабул итмәй. Киреһенсә, уны туҡмап, үлде инде, тиеп, сүплеккә сығарып ташлаған осраҡтар ҙа була. Нух бәйғәмбәр Аллаһынан: "Боҙоҡлоҡтар тараҡкан, диниеҙ кешеләрҙе ер йөҙөндә ҡалдырмаһаң ине - улар тура юлға баҫҡан динле кешеләрҙе юҡҡа сығарасаҡ", - тип үтенә. Аллаһы Тәғәлә Нух бәйғәмбәрҙең доғаһын ҡабул итә һәм уға оло бер кәмә эшләргә бойора. Жабраил фәрештә килеп, кәмәне ниндәй ҙурлыҡта, ниндәй формала эшләү тәртибен өйрәтә.

Нух (ғ.с.м.) кәмә эшләргә тотона. Ул ваҡытта уға 480 йәш була. "Һин кисә генә беҙгә үҙеңде бәйғәмбәр тип таныта инең, ә бөгөн балта оҫтаһы булып йөрөйһөң", тип, боҙоҡ әҙәмдәр Нух бәйғәмбәрҙән мыҫҡыллап көлә, кәмәнең эсенә инеп, хәжәттәрен үтәп, бәҙрәф ойоштора. Аллаһы Тәғәлә ул әҙәмдәрҙең ҡырын эштәрен күреп, белеп тора. Кәмәләге бысраҡтарҙы, тиҙәктәрҙе шул әҙәмдәрҙең үҙҙәренән таҙарттырыу ысулын ебәрә. Тәүҙә кәмә урынлашҡан ерҙә йәшәгән кешеләр араһында теш ауырыуы тарата. Теш ауырыуын һис бер ысул баҫа алмай, ғәжиз була халыҡ. Бына теше ҡаты һыҙлаған бер бәндә кәмәгә инеп, хәжәтен башҡарырға ултыра. Яңылыштан, бармағы тиҙәккә буяла һәм ул бысраҡтан арыныры теләп һелтәнгәндә бармағын кәмәнең таҡтаһына бәрә. Таҡтаға һуғылған бармаҡ бик ныҡ итеп ауырта башлай. Был кеше үҙе лә аңғармаҫтан, ауыртҡан тиҙәкле бармағын ауыҙына ҡаба. Әле генә түҙеп булмаҫлыҡ итеп һыҙлаған теште шундуҡ баҫыла. Был мөғжизәне ишетеп, тешәре һыҙлаған халыҡ кәмәгә ағыла башлай. Ысынлап та, тиҙәкте ауыҙға ҡабыу менән теш һыҙлауҙан туҡтай. Кәмәгә инеп тиҙәк алырға ҙур сират теҙелә. Тиҙәк барыһына ла етмәй ҡала, шуға ла кәмәне ҡырып, йомоҫҡаһын ауыҙға һалалар. Быны шулай кәмәнең эсен ялтыратып таҙартып ҡуялар...

Нух бәйғәмбәр кәмәне 120 йыл буйы эшләй. Кәмә өс ҡатлы була. Оҙонлоғо 300, киңлеге 50 терһәк тәшкил итә (хәҙерге үлсәм менән яҡынса 135 метр һәм 24 метр).

Аллаһының әмере илә рәхмәт фәрештәләре һәм Нух бәйғәмбәрҙең иманлы кешеләре кәмәгә һыу кермәҫлек итеп эстән-тыштан ыҫмала менән һылап, ямғыр һыуы үтмәҫлек итеп башын ябып ҡуялар. Кәмә һыуҙа йөҙөргә әҙер була. Аллаһының әмере буйынса кәмәнең өскө ҡатына ирлеҡатынлы 80 кеше урынлаша, урталағы ҡатта ҡушарлап төрлө ҡоштар, аҫҡы ҡатында ҡоро ерҙә йөрөгән ишле хайуандар урынлаша.

Кәмәгә алты айлыҡ аҙыҡ тултырыла. Барыһы ла әҙер булғас, кәмә ултырған төбәктә туфан һыуы ҡалҡа башлай. 40 көн һәм төн буйы ерҙән һәм күктән пәйҙә булған һыу бөтә донъяны баҫа.

Нух бәйғәмбәрҙең ҡатыны һәм улы Кәнғән Ислам динен ҡабул итмәгән була, шуға ла улар кәмәгә индерелмәй. Әммә Кәнғән: "Беҙ әсәйем менән бейек тау башына менеп, туфан һыуҙан ҡотолоп ҡаласаҡбыҙ", - ти һыр бирмәйенсә. Тик һыу иң бейек тау өҫтөнән 15 терһәк (7 метрға яҡын) күтәрелә. Ер йөҙөндә йәшәүсе йән эйәләре, кәмәләгеләрҙән башҡа, барыһы ла һыу аҫтында ҡалып һәләк була. Аллаһы Тәғәлә кәмә менән идара итергә 90 мең фәрештә ебәрә. Кәмәнең һыуҙа йөҙә башлаған беренсе көнө рәжәб айының 10-сы көнөнә тура килә. Кәмә башта атабыҙ Әҙәм тәҙәгән Ҡәғбәтуллаға барып, 7 мәртәбә урап, тауаф ҡыла. Унан һуң буласаҡ "Аль-Аҡса" мәсете (хәҙерге Иерусалим ере) эргәһенә барып зыярат ҡыла. Кәмә 6 ай буйына йөҙөп, көнсығыштан алып көнбайышҡа ҡәҙәр бөтә ер йөҙөн урап сыға. Һыу кәмей башлай, кәмә Ираҡтағы Жуди тауында туҡтай. Кәмә туктаған көн мөхәррәм айының 10-сы Ғәшүрә көнөнә тура килә. Шул сәбәпле Рәжәб айының 10-сы көнөндә һәм Мөхәррәм айының 10-сы көнөндә мосолмандарға ураҙа тотоу сөннәт тип иҫәпләнә. Был көндә 1000 мәртәбә "Ихлас" сүрәһен уҡыу ҙа сөннәт.

Кәмә туктағандан һуң, запаста ҡалған бойҙай һәм башҡа ярмаларҙан Нух (ғ.с.м.) бутҡа бешереп, кәмәләге кешеләрҙе һыйлай. Был бутҡа "Ғәшүрә бутҡаһы" тип атала, шулай уҡ был бутҡа беҙгә сөннәт булып ҡалған. Сөннәттәрҙе мөмкин ҡәҙәр үтәү сауаплы ғәмәл була. Кәмәлә Нух бәйғәмбәрҙең өс улы - Сам, Хам, Яфис була. Самдың балалары - ғәрәптәр, фарсылар булып, Йемен, Ираҡ, Сирия, Ғәрәбстанға һ.б. илдәргә тарала.

Хамдың балалары - негрҙар, эфиоптар Африка илдәренә, Яфистың балалары Европа илдәренә тарала. Хамдың улы Мисрайиминдың балалары Мысырға юл тота. Мысыр (Египет) һүҙе Мисрайимин исеменән сыҡҡан.

Нух бәйғәмбәр 950 йәш йәшәй. Бәйғәмбәрҙәр араһында иң оҙаҡ йәшәгәндәрҙең береһе була. Ҡөрьән китабында Нух ғ.с.м. тураһында 43 урында, туфан тураһында 13 урында, кәмә төҙөү хаҡында 5 урында иҫкә алына. Таурат китабының 6, 7, 8 булектәрендә туфан тураһында бик ентекләп һөйләнелә.

**Исмәғил хәҙрәт ХӘКИМ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# БӘРӘКӘТ КИСЕНДӘ...

## йөрәктәребеҙҙе таҙартайыҡ

**Бәрәкәт кисе - бөйөк динебеҙҙең кешеләргә ике йыһан бәхетен вәғәҙә итеүсе мөбәрәк кистәренең береһе ул. Бурыстарҙан, язанан һәм гонаһтарҙан арыныу һәм ҡотолоуҙы аңлатыусы һәм мөьминдәргә Аллаһтың рәхмәт һәм мәғфирәтен күпләп биреүсе был кис шәғбан айының ун бишенсе кисенә тура килә.**

Был изге кистә алдағы йылда донъяла булырға тейешле бөтөн ваҡиғалар, әжәл һәм ауырыуҙар, уңыштар һәм уңышһыҙлыҡтар буйынса ҡарарҙар сығарылып тормошҡа ашырылыу өсөн фәрештәләргә тапшырыла. Бәрәкәт кисе хөкөм һәм тәҡдир, асыу һәм ризалыҡ, ҡабул итеү һәм кире ҡағыу, изге ғәмәлдәргә өлгәшеп, уларҙы һаҡлау, бәхет һәм бәхетһеҙлек, шәфәғәт һәм изгелек төнө. Бәғзеләр был төндә бәхет ҡаҙана, икенселәр Аллаһ рәхмәтенән мәхрүм ҡала, берәүҙәр ҙур әжер ала, икенселәрҙең Аллаһы Тәғәлә алдындағы дәрәжәһе кәметелә һәм улар бәхетһеҙҙәр сафына эләгә, берәүҙәр уныш ҡаҙана, икенселәр бер нәмәһеҙ тороп ҡала.

Шәғбан айының 14-енән 15-енә ҡарай кистә япраҡтарына Ерҙә йәшәгән һәр кемдең исем-шәрифтәре яҙылған тормош ағасы тетрәнеп, япраҡтары ҡойола. Исемдәре ошо ҡойолған япраҡтарҙа булғандар йыл дауамында фани донъянан күсеп китәсәк. Ә йәшәп ҡалғандарҙың яҙмышы фәрештәләр ихтыярына тапшырыласаҡ. Бөтөн булмыштарҙың, бөтөн мәхлүктәрҙең ашар ризығы, бәндәләрҙең байлыҡ йәки ярлылыҡ хәлдәре, тормоштағы төрлө дәрәжәләре, был донъяға тыуасаҡ һәм үләсәк бәндәләр - бөтәһе лә был кистә билдәләнеп ҡуйыла, ти. Бер ғалим "Был төндә ихлас күңелдән Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итеп, Унан изге ғәмәлдәрегеҙҙе ҡабул ҡылып, гонаһтарығыҙҙы ғәфү итеүен һорағыҙ", - тип әйтә. Балиғ булған һәр мосолман бер ҡасан да Аллаһтан килгәнлеген һәм Аллаһҡа ҡайтасағын онотмаҫҡа тейеш. Шуға күрә мосолман кешеһе бындай бер тәҡдир һәм хөкөм кисен ғәфләттә, йәғни Раббыһына ҡарата вайымһыҙлыҡта үткәрә алмай.

Бәрәкәт кисе иманлы күңелдәр өсөн бик бөйөк бер рәхмәт һәм мәғфирәт киселәр. Һөйөклө Бәйғәмбәребеҙ бының тураһында бер хәҙисендә шулай тип әйтә: "Шәғбан айының яртыһы үткән кисте ғибәҙәттә һәм итәғәттә үткәрегеҙ. Көндөҙ ураҙа тотоғоҙ. Сөнки ҡояш байыу менән, Аллаһы Тәғәлә донья күгенә инеп, барса мәхлүҡкә мөрәжәғәт итә һәм шулай бойора: "Юҡмы истиғфар итеүсе, уны ғәфү итәм! Юҡмы ризыҡ һораусы, уға ризыҡ бирәм! Юҡмы ауырып, сәләмәтлек һораусы, уға сәләмәтлек бирәм! Юҡмы шуны теләгән, быны теләгән..."

Бәйғәмбәребеҙҙең икенсе бер хәҙис шәрифендә шулай тип әйткәне билдәле: "...Был кис, шәғбандың ун бишенсе киселәр. Аллаһ Тәғәлә был кистә Ҡәлб ҡабиләһе көтөүҙәрендә булған (һарыҡтарҙың) йөнө һаны тиклем кешене йәһәннәмдән азат итер. Ләкин ширҡ килтереп, мосолмандарға ҡаршы дошманлыҡ тотоусыларҙың, ҡәрҙәшлек һәм туғанлыҡ бәйҙәрен өҙөүселәрҙең, йәшәү рәүештәре менән тәкәбберләнеүселәрҙең һәм ата-әсәһенә ҡаршы килгәндәрҙең йөҙөнә ҡарамаҫ".

Был мөбәрәк булған киселәрҙе һәм мәғфирәт кисендә бар булмышыбыҙҙы Аллаһҡа йүнәлтәйек, Унан ғибәҙәттәребеҙҙең ҡабул булыуын һәм гонаһтарыбыҙҙың киселелеүен һорайыҡ. Йыл буйына ҡылған эштәребеҙҙе тағы бер барлап, тикшереп сығайыҡ, яңылыш эштәребеҙ, ҡылыҡтарыбыҙ бар икән, уларҙы төҙәтәйек. Ошондай мөбәрәк кистәрҙе намаҙ ҡылып, Ҡөрьән уҡып, доғаларҙа булып, уяу күңел менән үткәрәйек. Ололарыбыҙҙың хәлен беләйек, мәрхүмдәребеҙҙе рәхмәт менән иҫкә төшөрәйек, дошманлыҡ, үпкәләүҙәрҙе онотайыҡ. Күңелебеҙҙе, ҡәлбебеҙҙе етеп килгән рамаҙандарға һәм әхирәткә таҙартайыҡ.

Хәҙистәргә ярашлы, быйыл Бәрәкәт кисе 12 июндән 13 июнгә ҡарай төнгә тура килә.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артындан башҡаларҙы эйәртергә?

### Йомартлыҡ: яндырған майшәмегеҙ башҡаларға ла яҡтыртыуҙан кәмемәҫ

"Әлегәсә бер кем дә нимәләр алған өсөн данға күмелгәне юҡ. Дан - ул биргән өсөн награда", тигән Америка президенты Калвин Кулидж. Ысынлап та, тирә-яҡтағыларға бер нәмә лә лидерҙың йомартлығы һәм киң күңеллелегенә ҡарағанда нығыраҡ тәьҫир итмәй һәм инандырмай. Тормошта бер тапҡыр ғына күҙәтелгән был сифатты ысын йомартлыҡ тип әйтеп булмай, әлбиттә. Ул йөрәктә тыуа һәм лидерҙың тормошонoң һәр аспектын үтә сыға, туранан-тура уның ваҡытына, аҡсаһына, талантына, мөлкәтенә ҡағыла. Үҙҙәренең артынан башҡаларҙы эйәртергә һәләтле йоғонтоло лидерҙар тәү сиратта башҡаларҙың мәнфәғәтенән сығып эш итә.

**Үҙегеҙҙә йомартлыҡ булдырығыҙ һәм уны тормошоғоҙҙоң айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләндерегеҙ. Бының өсөн:**

● **Булғанына шөкөр итегеҙ һәм рәхмәтле булығыҙ.** Әгәр булғанына шөкөр итә белмәй, булғаны ҡәнәғәтләндермәй икән, кеше йомарт була алмай. Йомартлыҡ ҡәнәғәтлектән тыуа, ә ниндәйҙер яңы нәмә алған һайын артмай. Рокфеллер былай тигән: "Мин миллиондар эшләнем, әммә улар миңә бәхет килтермәне". Әгәр булғанына шөкөр итәһегеҙ, ҙур нәмә лә ҡәнәғәтләнә беләсәкһегеҙ. Әгәр инде аҙға эйә булғанда йомартлыҡ күрһәтмәһәгеҙ, байып киткәс тә үҙгәрмәйәсәкһегеҙ.

